ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

19-25 сентябрь (нарысай) 2025

№37 (1181)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл етте: 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ.***

***Мөхәрририәт.***


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өс йылға сатындағы ҡала,**
йәки Нисә йәш һинә, Өфө?



7

**Тап радиолағы остаздарыбыҙҙан...**
һүҙгә ихтирам һаҡларға өйрәндек



8-9

**Ағай кәрәк...**



11

**Һаҡмар буйын тетрәткән...**
юрматы уҡытыусыһы тураһында



12-13


@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ*

# ӘҘЕРЛЕКТЕ ТАМАМЛАНЫЛАР,

## һәйкәл цехҡа китә



**Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәлен реконструкциялауға әҙерлекте тамамланылар.**

30 июндә федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объектын, милли батырыбыҙ, республикабыҙҙың төп символы Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау башланғайны. Әлеге ваҡытта әҙерлек эштәре тамамланған: һәйкәлдең тирә-яғы ҡойма менән уратып алынған, ваҡытылыса инженер селтәрҙәре, электр уты үткәрелгән, видеокүҙәтеү ҡуйылған. Шулай уҡ һәйкәлде нығытыу өсөн тимер конструкциялар әҙерләнгән.

Ошо көндәрҙә республика хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов реконструкция урынында эш барышына арналған кәңәшмә үткәрҙе. "Барлыҡ эштәр юл картаһына ярашлы, график буйынса тәғәйен ваҡытта башҡарыла. Сентябрҙә ҡурғандың ваҡытлыса ҡоймаһын һүтеп, ер эштәренә тотонорға ниәтләйбеҙ. Шулай уҡ брусчатка һәм гранит баҫҡыстар һүтеләсәк. Объектты мин үҙем шәхсән айырым контролемдә тотам. Эш барышының төп этаптары һәм уларҙың һөҙөмтәләре тураһында даими хәбәр итеп торасаҡмын", - тип яҙҙы Рөстәм Ғәзизов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Башҡортостандың мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы начальнигы Салауат Ҡолбахтин, Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау мәсьәләһенә бәйле халыҡтың хәүефләнеүе бушҡа, тип белдерә. Уның һүҙҙәренсә, һәйкәлде яңыртыу эштәре мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау буйынса федераль законға ярашлы алып барыла. Был процеста бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр индерелергә тейеш түгел.

"Салауат Юлаев һәйкәле урынына кире ҡайтамы?" тигән һорауға яуап биреп, һис шикләнмәйенсә: "Эйе", - тип әйтәм! Реставрация эштәрен үткәреү сиктәрендә федераль ҡануниәт талаптарын үтәмәгән өсөн яуаплы кешеләр енәйәт яуаплылығына тиклем тарттырылырға мөмкин", - тип һыҙыҡ өҫтөнә ала Ҡолбахтин.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# КҮГӘРСЕН ТОТҠАН ҠЫҘ...

## Өфөбөҙгә ҡайтһын әле

**Өфөбөҙ үҙенең йәшеллеге, матурлығы, ҙурлығы менән һәр кемдең күңеленә яҡын ҡала. Ул шулай уҡ Рәсәйҙең иң мөһим сәнәғәт үҙәктәренең береһе булыуы менән дә билдәле.**

Өфөнөң һәм республиканың ғына түгел, ә тотош илдең иң ҙур, ҡеүәтле һәм стратегик әһәмиәткә эйә заводтарының береһе - Өфө моторҙар етештереү берекмәһе (УМПО) быйыл үҙенең 100 йыллығын билдәләне. Мин ошо заводта эшләүем менән ғорурланам. Һәм заводтың "Башҡорт вахтаһы" проектына ихлас ҡушылыуын хуплайым. Ошондай ойошмалар күберәк булһа һәм яҡшы эш хаҡы, йәшәү урыны менән тәьмин ителһә, алыҫ Себер тарафтарында, башҡа урындарҙа вахта менән эшләп йөрөгән ир-егеттәребеҙ Башҡортостанға ҡайтыр ине. Хәҙер хатта вахта ысулы менән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күп эшләй. Балаларын, ирен, йорт-ҡураһын ҡалдырып, ситтә эшләргә мәжбүр улар. Әйҙәгеҙ, Хөкүмәтебеҙ тарафынан тормошҡа ашырылған ошо "Башҡорт вахтаһы" программаһын киңерәк йәйелдереп, милләттәштәребеҙҙе үҙ республикабыҙға ҡайтарайыҡ.

**(Дауамы 4-5-се биттәрҙә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ФЕДЕРАЛЬ ИСЕМЛЕКТӘ!




**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслектәре Федераль исемлеккә индерелде. Һүҙ "Туған (башҡорт) тел", "Туған (башҡорт) әҙәбиәт", "Дәүләт башҡорт теле" предметтары буйынса дәреслектәр хаҡында бара.**

Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы үҙенең бойороғо менән 1-9-сы кластар өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән 46 комплект дәреслекте Федераль исемлеккә индерҙе. Был дәреслектәр 2029 һәм 2030 йылдарға тиклем ғәмәлдә була, тип хәбәр иттеләр республиканың Мәғариф министрлығынан. Ведомствола белдереүҙәренсә, министрлыҡ "Туған (башҡорт) тел", "Туған (башҡорт) әҙәбиәт", "Дәүләт башҡорт теле" предметтары буйынса дәреслектәрҙең йөкмәткеһен Федераль дәүләт мәғариф стандарттарына ярашлы итеү буйынса маҡсатлы эш алып барҙы. Был ойошмаларға башланғыс дөйөм, төп дөйөм, урта дөйөм белем биреү программаларында ҡулланырға рөхсәт ителгән дәреслектәрҙе артабан Федераль исемлеккә индереү өсөн кәрәк ине.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

12+

✓ Тыйыуҙың сәбәбе - именлекте һаҡлау. Асыҡ сығанаҡтарҙағы видео һәм фотолар буйынса дошмандар уҙған һөжүмдәрҙең һөҙөмтәләрен анализлай, хәрби объекттарҙың урынын һәм хәрәкәтен күҙәтә.



ҠЫҪҠАСА

# ҺАЙЛАУҘА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткәргән аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә берҙәм тауыш биреү көнөнә йомғаҡ яһалды.** Урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары депутаттарын һайлау һөҙөмтәләре тураһында республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Азат Ғәлимханов хәбәр итте. Республикала бөтәһе 150 һайлау кампанияһы үтте, 239 мандат алмаштырылды. Һайлауҙа 652 кандидат, шул иҫәптән 13 Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы теркәлгән. Һайлау йомғаҡтары буйынса, республикала Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың 13-ө лә депутат мандаты алған. Яҡынса йомғаҡтар буйынса, Башҡортостанда һайлаусыларҙың 45,6 проценты тауыш биргән. Бөтә кимәлдәге һайлауҙарҙа мандаттар түбәндәгеләр: "Берҙәм Рәсәй" - 198 мандат; "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт өсөн" - 10 мандат; ЛДПР - 7 мандат, КПРФ - 6 мандат; "Яңы кешеләр" - 2 мандат; "Граждандар платформаһы" - 1 мандат, үҙ-үҙен тәҡдим итеүселәр - 15 депутат мандаты.

✓ **Уңыш йыйыу ҡатмарлы һауа шарттарында бара. Башҡортостанда сәселгән баҫыуҙарҙың 46 проценты - 960 мең гектар майҙан һуғылған, 2,6 миллион тонна иген йыйып алынған, уртаса уңыш иһә гектарынан 29 центнер тәшкил итә.** Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов ошо турала һөйләне. Билдәләнеүенсә, уҙған аҙнала комбайндар тәүлегенә уртаса 30 мең гектар үткән. Был аҙнала яҡшы һауа торошо булыр тип көтөлә. Ауыл хужалығы министрлығы темпты арттырырға һәм тәүлегенә 45 мең гектар ашлыҡ йыйып алырға иҫәп тота. Шәкәр сөгөлдөрө майҙандарының 20 проценты йыйып алынған (418 мең тонна, уңыш 426 центнер). Май культуралары йыйып алынған 10 процент майҙандан 100 мең май орлоғо алынған, ә бөтәһе 640 мең гектар сәселгән. Яҙғы культураларҙы йыйыу менән бер үк ваҡытта ужым сәсеү бара: пландың 59 проценты (232 мең гектар) сәселгән.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың ИТ-өлкәһе вәкилдәре менән осрашты.** "Киберспортсыларҙы яҡшы һөҙөмтәләр менән ҡотлаһым, - тип яҙҙы республика етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Өфө фән һәм технологиялар университеты студенттары уҙған миҙгелдә компьютер спорты буйынса Рәсәй чемпионатында икенсе урынды яуланы, башҡа, шул иҫәптән халыҡ-ара ярыштарҙа уңышлы сығыш яһаны". Шулай уҡ республика етәксеһе ҙур "Креатив индустриялар сәғәте" үткәрҙе, унда республикала мәғлүмәт технологияларын үҫтереү тураһында фекер алышыу булды. "Был өлкә әүҙем үҫешә, әммә элек бындай осрашыуҙар үткәрмәнек. Бик һөҙөмтәле һөйләшеү килеп сыҡты", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Кәңәшмә йомғаҡтары буйынса беҙҙең ИТ-секторға ярҙам итергә мөмкинлек биргән бер нисә йөкләмә формалаштырыла.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ҺӨҘӨМТӘЛЕ БӘЙЛӘНЕШ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәскәүҙә Рәсәйҙең спорт министры Михаил Дегтярев менән осрашты. Был хаҡта республика етәксеһе социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙып сыҡты. Рәсәй Федерацияһының Спорт министрлығы - беҙҙең иң мөһим партнерҙарҙың береһе. Шуға күрә уның етәксеһе Михаил Дегтярев менән республикала физкультураны һәм спортты үҫтереү мәсьәләләрен тикшереү өсөн даими осрашып торорға һөйләштек. Ошондай даими уртаҡ эш кенә һөҙөмтә бирә", - тип яҙҙы республика Башлығы.**

Радий Хәбиров Михаил Владимировичҡа республикабыҙға даими һәм әүҙем ярҙамы өсөн рәхмәт белдерҙе. Министрлыҡ яғынан иғтибарҙың булыуы һөҙөмтәһендә, ҡатмарлы осорға ҡарамаҫтан, Башҡортостанда спорт инфраструктураһы объекттарын төҙөү эштәре йылдам бара. Һөйләшеү темаларының береһе Өфөлә еңел атлетика манежын төҙөү перспективалары-на арналды. "Был объект республикабыҙға бик кәрәк. Еңел атлетика - популяр спорт төрө, ә республикала ябыҡ еңел атлетика манежы бер ҡасан да булманы", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Осрашыуҙа Башҡортостанда халыҡ-ара һәм федераль саралар ойоштороу хаҡында ла һүҙ барҙы. Атап әйткәндә, быйыл декабрҙә республикала һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар араһында тәүге БДБ уйындары үткәрелә, 2026 һәм 2028 йылдарҙа иһә Башҡортостан Рәсәйҙең төп спорт ярыштарын - Йәйге һәм ҡышҡы спорт төрҙәре буйынса иң көслөләр спартакиадаһын ҡабул итергә әҙерләнә.

# БЕҘГӘ ЛӘ ҺӨЖҮМ ИТӘЛӘР

**Башҡортостан Башлығы террорға ҡаршы комиссия һәм оперштаб ултырышын үткәрҙе. Көн тәртибендә - республиканың сәнәғәт объекттарын пилотһыҙ осоу аппараттары ҡулланылған диверсия-террористик һөжүмдән һаҡлау. Кәңәшмә эшендә төбәктең көс структуралары, министрлыҡтары һәм ведомстволары, эре сәнәғәт предприятиелары етәкселәре ҡатнашты.**

Радий Хәбиров 13 сентябрҙә "Башнефть" компанияһы объекттарына ике пилотһыҙ аппарат һөжүм итеүен иҫкә төшөрҙө. "Республикала булдырылған БПЛА һөжүменән һаҡланыуҙың ҡатнаш системаһы ярҙамында ауыр эҙемтәләргә юл ҡуйылманы, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Һөжүм предприятиеларҙың эшенә йоғонто яһаманы. Һәләк булыусылар һәм зыян күреүселәр юҡ".

Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, сәнәғәт объекттарына һөжүм ваҡытында барлыҡ хеҙмәттәр теүәл һәм оператив эшләгән. Яҡынлашып килгән БПЛА тураһында сигнал алғандан һуң предприятиеларҙа ваҡытында эвакуация үткәрелгән һәм мобиль төркөмдәр пилотһыҙ аппараттарға ҡаршы ут асҡан. "Быларҙың барыһына ла ҡарамаҫтан, киләсәктә беҙгә предприятиеларыбыҙҙы һөжүмдәрҙән ышаныслыраҡ яҡлауҙы тәьмин итеү буйынса өҫтәмә саралар күрергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров. Ултырышта ҡатнашыусылар республика сәнәғәт объекттарының именлеген арттырыу буйынса тәҡдимдәрҙе тикшерҙе.

"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы хәбәр итеүенсә, һөжүмдән күрелгән зыян әлләни ҙур түгел, әле завод штат режимда эшләй, ағыулыҡ менән тәьмин итеүҙә бер ниндәй ҙә өҙөклөктәр булмаясаҡ. Ваҡиға урынында мобиль лаборатория эшләй, хәл белгестәр контроле аҫтында. Экология министры Нияз Фазылов хәбәр итеүенсә. Өфөнөң Ульяновтар урамындағы 74-се йортта урынлашҡан лаборатория нөктәһенән алынған анализдар һауаның зарарлы матдәләр менән бысраныуы норманан юғары булмауын күрһәткән. Параллель рәүештә ҡаланың башҡа районларында урынлашҡан автоматлаштырылған контроль станцияларында һауа сифатына тәүлек әйләнәһенә мониторинг алып барыла. Үткәрелгән мониторинг һөҙөмтәләре буйынса атмосфера һауаһында бысратыусы матдәләрҙең рөхсәт ителгән концентрацияһы артыуы асыҡланмаған.

**Әйткәндәй...**

**Башҡортостанда дошман дрондарын видео һәм фотоға төшөрөп интернетҡа һалыу тыйылды. Был хаҡтағы указға Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы.**

Тыйыуҙың сәбәбе - именлекте һаҡлау. Асыҡ сығанаҡтарҙағы видео һәм фотолар буйынса дошмандар уҙған һөжүмдәрҙең һөҙөмтәләрен анализлай, хәрби объекттарҙың урынын һәм хәрәкәтен күҙәтә, шуларға нигеҙләнеп, киләһе һөжүмдәргә әҙерләнә ала. Бындай фото һәм видеоларҙы шәхси сәхифәләр, мессенджерҙар аша тараткан өсөн штраф: 3 000 - 5 000 һум. Киң мәғлүмәт саралары һәм блогерҙарға: 100 000 - 500 000 һум. Тыйыу әле ҙә көсөндә булған әҙерлек режимы менән бәйле һәм уның менән бергә ғәмәлдән сыға.

# ӘҮҘЕМ СТУДЕНТТАР ЙЫЙЫЛҒАН

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров донъя кимәлендәге Евразия ғилми-белем биреү үҙәге вуҙ-ара студенттар кампусының Геном үҙәгендә урта һөнәри белем биреү учреждениеларының студент һәм профсоюз лидерҙары менән осрашты.**

Осрашыуға республиканың 56 колледжынан йәмғеһе 180 активист килде. Республика етәксеһе йәштәргә Өфөлә кампустың икенсе сираты төҙөлөшөн дауам итеүҙәре хаҡында һөйләне. Проектта стилобат менән тоташтырылған 10-сы ҡаттан 29-сы ҡатҡа тиклем бейеклектәге ете башня төҙөү ҡаралған. Бында 4,3 мең студент урыны өсөн ятаҡтар, уҡыу блоктары, лабораториялар, ижтимағи-эшлекле киңлектәр булдырыла.

"Бөгөнгө осрашыу минең өсөн мөһим, - тип билдәләне Радий Хәбиров.- Беҙҙең колледждарҙа 120 мең студент уҡый. Был ғәйәт ҙур көс, ҙур ғаилә, унда һәр кем мөһим. Беҙгә һеҙҙең ниндәй уй-фекерҙәрегеҙ бар икәнен аңларға кәрәк. Бөгөн урта һөнәри белем биреү системаһы оло әһәмиәткә эйә, сөнки йылдам иҡтисади үҫеш шарттарында беҙгә квалификациялы хеҙмәт ресурстары кәрәк. Башҡортостанда 92 колледж бар. Республикала күп колледждар беҙҙең йылы иғтибарҙы тойҙо. Тәү сиратта белгестәрҙе уҡытыу кимәлен күтәреү өсөн матди базаны яҡшырта башланыҡ. Йыл һайын республика бюджетынан колледждарҙы һәм ятаҡтарҙы ремонтлауға 500 миллион һум аҡса бүләбеҙ..."

Хәтерегеҙҙә төшөрәбеҙ, өс йыл элек эсендә был маҡсатҡа төбәк бюджетынан 1,2 миллиард һум аҡса бүленгән, 38 бина ремонтланған.

Радий Хәбиров Башҡортостандың "Профессионалитет" федераль проектына әүҙем ҡушылыуы хаҡында ла һөйләне. Әлеге көндә республика урта һөнәри белем биреү кластерҙары һаны буйынса Рәсәйҙә алдыңғы урындарҙы билә, быйыл улар 19. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса 2026 йылда тағы ла 8 кластер булдырыла, ошо маҡсатҡа 800 миллион һум федераль субсидиялар йәлеп ителгән.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә Радий Хәбиров республиканың спорт мәктәптәре директорҙарына яңы автобус асҡыстары тапшырҙы. Транспортты Өфө районының спорт мәктәбе, Благовещен районының балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе һәм Башҡортостандың биатлон буйынса олимпия резервы спорт мәктәбе алды. Республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов билдәләүенсә, был автобустар "Физик культураны һәм спортты үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә һатып алынған.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операция ветерандары ассоциацияһы ултырышында ҡатнашты. "Ассоциация алдында торған бурыстар иҫәбендә һәләк булғандарҙың хәтерен мәңгеләштереү, инвалидтар хаҡында хәстәрлек күреү, хәрбиҙәрҙе тыныс тормошҡа яраҡлаштырыуы һәм уларҙы эшкә урынлаштырыу, шулай уҡ йәштәрҙе патриотик тәрбиәләү тора, - тип билдәләне төбәк етәксеһе. - Йәштәр өсөн һеҙ - Башҡортостанды яратҡан һәм уның менән ғорурланған ысын ир-егет, илһөйәрлектең тере миҫалы. Был мөһим эш менән шөғөлләнеүегеҙ өсөн һеҙгә рәхмәтлебеҙ".

✓Дүрт ай элек асылған Республика Кардиология үҙәгенең яңы хирургия корпусында биш меңгә яҡын операция һәм уникаль тикшеренеүҙәр үткәрелгән. Был хаҡта Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә төбәктең һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итте. Ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары үлем структураһында беренсе урынды биләй. Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары менән көрәш буйынса төп саралар иҫәбендә сифатлы диспансер күҙәтеүе, диагностика һәм дауалау схемаларын камиллаштырыу тора. "Яңы операция бүлмәләрендә уникаль гибрид операциялар үткәрелә, ә пациенттар өсөн унайлы шарттар булдырылған", - тине министр.

✓Белоретта полиция хеҙмәткәрҙәре наркотик матдәләрҙе законһыҙ һатып алыуҙа шикләнелгән ике кешене ҡулға алған. 1,1 грамм самаһы ауырлыҡтағы наркотиктар һалынған пакетты полиция хеҙмәткәрҙәре 42 йәшлек ҡатындан тапҡан һәм тартып алған. Шул уҡ көндө полиция хеҙмәткәрҙәре 25 йәшлек ирҙе ҡулға ала, тикшереү барышында шулай уҡ 1,7 грамм ауырлыҡтағы аҡ матдә пакеты табыла. Экспертиза һөҙөмтәләре уның наркотик булыуын күрһәтә. Уларға ҡарата енәйәт эштәре ҡуҙғатылған.

✓Ирек Хисмәтуллин Баймаҡ ҡалаһының яңы мэры итеп тәғәйенләнде. Баймаҡ районы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, быға тиклем чиновник Баймаҡ ҡалаһы торлаҡ фондының идарасы компанияһына етәкселек иткән. Бынан алдараҡ Баймаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығы Радмир Иҫәнбаевтың вазифаһын ҡалдырыуы тураһында хәбәр ителгәйне.

✓ ***Офицер һан яғынан күберәк булған украин боевиктары менән алыша. Суфияров күҙәтеү пунктындағы позицияһын ташлап китмәй, дошман яҡынлаша башлағас, үҙен һәм ВСУ-ның өс һалдатын граната менән шартлата...***



*РӘСМИ СЫҒАНАҠ*

# БАТЫРЛЫҠҠА УРЫН БАР...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылда МХО биләмәһендә батырҙарса һәләк булған Рәсәй Геройы Илдар Суфияровтың кәүҙәһе табылған, тип хәбәр иткәйне һәм Хөкүмәттең был аҙналағы оператив кәңәшмәһен һәләк булған яугирҙарҙың иҫтәлегенә бер минут тынлыҡтан башлағайны.**

"Минә Суфияров Илдар Филорет улының кәүҙәһен табыуҙары хаҡында хәбәр иттеләр. Уның янында тағы өс яугир. Кәүҙәһен Ростовҡа экспертизаға килтергәндәр. Иртәнсәк Суфияровтың әсәһенә һәм ҡатынына шылтыраттым. Ауыр бурыс үтәргә тура килә. Илдар Филорет улы - ғәжәйеп кеше. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙен яҡындан белмәй инем", - тине Радий Хәбиров.

Һәм бына 18 сентябрҙә Өфөлә "Башҡортостан" дәүләт концерт залына һуңғы минутынаса Тыуған иленең сиген һаҡлап, алғы һыҙыҡта һәләк булған Рәсәй Геройы Илдар Суфияровты һуңғы юлға оҙатырға йыйылдылар. Матәм сәхнәһына ҡаһарман яугирҙы белгән һәм уны хөрмәтләп иҫкә алырға теләгән һәр кем бәхилләшергә килде.

Өлкән лейтенант, "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкының Даян Мурзин исемендәге батальон взводы командиры Илдар Суфияровтың батырлығы был көндәрҙә һәм кемдең телендә булды. Тормошобоҙҙа бындай батырлыҡтарға ла урын бар шул әле. Яугир 2024 йылдың апрелендә МХО биләмәһендә һәләк булды. Офицер һан яғынан күберәк булған украин боевиктары менән алыша. Хәрби хәлдең ҡатмарлы булыуына ҡарамаҫтан, Суфияров күҙәтеү пунктындағы позицияһын ташлап китмәй, дошман яҡынлаша башлағас, үҙен һәм ВСУ-ның өс һалдатын граната менән шартлата...

Уҙған йылдың октябрендә Рәсәй Президенты Владимир Путин Указы менән Илдар Суфияровҡа үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме бирелде. Был исемде юллауға күп көс һалған республика Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Президенты Владимир Путинға һәм илдең оборона министры Андрей Белоусовҡа оло рәхмәт белдерҙе.

Яҡташыбыҙ Илдар Суфияров баш ҡаланың Көньяҡ зыяратында ерләнде.

# ИКЕ БАШ ҠАЛА БӘЙЛӘНЕШЕ

**Өфө мэры Ратмир Мәүлиев етәкселегендәге делегация эш сәфәре менән Минск ҡалаһында булды. Белоруссияның баш ҡалаһы менән Өфөнө ныҡлы дуҫлыҡ һәм партнерлыҡ ептәре бәйләй.**

Эшлекле программа Халыҡ-ара иҡтисади хеҙмәттәшлек форумынан башланды. Унда башҡалар иҫәбендә Белоруссия баш ҡалаһының медицина һәм туристик потенциалы ла күрһәтелде.

"Был - тәжрибә уртаҡлашыу һәм яңы бәйләнештәр булдырыу өсөн бик яҡшы мөмкинлек. Беҙҙең хеҙмәт коллективтары Минск предприятиелары менән әүҙем һәм һөҙөмтәле хеҙмәттәшлек итә, берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашыра һәм иҡтисади бәйләнештәрҙе үҫтерә. "МАЗ" менән "Өфө трамвай-троллейбус заводы" акционерҙар йәмғиәтенең технологик мөмкинлектәрен берләштереүҙең ҙур потенциалын күрәбеҙ. Ул инновацион пассажирҙар транспортын булдырыу юлдарын аса", - тип билдәләне Ратмир Мәүлиев.

Өфө ҡала хакимиәте башлығы Минскттың сәнәғәт майҙансыҡтарын инновацион үҙәктәргә күсереү тәжрибәһе ҡыҙыҡлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Мәғрүр таш" индустриаль паркы менән Өфөнөң "ПромҮҙәк" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең берлектә эшләү мөмкинлектәре тикшерелде. Нефть химияһы, тәҙөләш һәм IT өлкәләрҙә бәйләнештәр унышлы үҫешә. Үҙ-ара бәйләнештәрҙең ныҒый барыуы ике яҡ өсөн дә тик файҙаға ғына буласаҡ, тигән ышаныс белдерҙе Ратмир Мәүлиев.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# АҒАС УЛТЫРТАЛАР,

## ҡороғанынан таҙарталар

**Республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә "Йәшел Башҡортостан" акцияһы пландары тураһында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, быйыл көҙгө акция 20 сентябрҙән 4 октябргә тиклем үтәсәк, сараны уҙғарыуҙың берҙәм көнө итеп 27 сентябрь билдәләнгән.**





"Акция сиктәрендә төбәк буйынса 4 меңдән ашыу эре ағас һәм 40 мең башҡа үҫенте ултыртыласаҡ. Шулай уҡ алдағы акциялар сиктәрендә ултыртылған 9 мең ағас һәм ҡыуаҡлыҡ йәшелләндереләсәк. Республикала өс яңы аллея барлыҡҡа киләсәк. Өфөлә генә көҙгө осорҙа 1600-ҙән ашыу эре һәм 4000 ҡыуаҡ ултыртыу күҙаллана. Бынан алда республикала "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә 5,5 меңдән ашыу ағас ултыртылды", - тип һөйләне Голованова.

**Әйткәндәй...**

Ошо көндәрҙә урман хеҙмәте ҡаланың тағы бер мөйөшөн ҡороған ағастарҙан таҙартты. "Горзеленхоз" хеҙмәткәрҙәре ВДНХ комплексы эргәһендәге ҡороған ҡайындарҙы алып ташланы. Бында эш матурлыҡта ғына түгел, ә уның хәүеф тыуҙырыуында. Ҡороған ағас бик хәүефле, тиҙ һынысанға әйләнә. Күргәҙмә комплексы яны иһә - кешеләр һәм автомобилдәрҙең күпләп тупланған урыны.

Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ идаралығы етәксеһе Арсен Латипов билдәләүенсә, эш ҡатмарлы һына булған, сөнки өскө өлөшөндә электр селтәрҙәре, троллейбустарҙың контакт линияһы, элемтә кабеле, аҫта - тротуар, ҡойма һәм юл. Бынан алда Дим районында ҡороған тирәктәрҙе алғайнылар, уны ағасты һырлап эшләүселәргә бирергә уйлайҙар.

*ҠЫҪҠАСА*

# КИҘЕҮ КИЛӘ...

**Роспотребнадзорҙың республика идаралығынан респиратор инфекциялар һәм грипп буйынса эпидемиологик хәл тураһында хәбәр иттеләр.** Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы аҙнала Башҡортостанда киҫкен респиратор инфекцияһын йоҡтороуҙың 20 368 осрағы теркәлгән, шуларҙың 9774-е - 14 йәшкә тиклемге балалар араһында. Уҙған аҙна менән сағыштырғанда сирлеләрҙең 44,4 процентҡа артыуы күҙәтелә. Республиканың Роспотребнадзор идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, рәсми рәүештә прививка яһау кампанияһы башланды. Медицина ойошмаларына грипҡа ҡаршы вакциналарҙың тәүге партиялары - "Совигрипп", "Флю-М", "Ультрикс Квадри" килтерелде, тип өҫтәнеләр ведомствола. Республикаға грипҡа ҡаршы 505 540 доза вакцина килтерелгән, шул иҫәптән өлкәндәр өсөн - 246 890 доза, балалар өсөн - 258 650 доза. 10 сентябргә табиптар 389 573 кешегә прививка яһаған. Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығында ата-әсәләргә балала ауырыу билдәләре беленһә, уны өйҙә ҡалдырырға һәм табип саҡыртырға кәрәклеге хаҡында иҫкә төшөрҙөләр. Табиптар әйтеүенсә, грипҡа ҡаршы вакцинация - был сирҙе иҫкәртеүҙең иң һөҙөмтәле алымы, грипптың ауыр əҙемтәләренән һаҡлай, дауахананан тыш пневмония хәүефен кәметә һәм иммун системаһына һаҡлағыс антитәнсәләр эшкәртеп сығарырға ярҙам итә. Прививка яһатыу өсөн иң ҡулайлы ваҡыт - сентябрь-ноябрь айҙары.

✓ **Башҡортостанда быйыл ғинуарҙан августа тиклем 108 кеше спиртлы эсемлектәр менән ағыуланып үлгән.** Былтыр ошо осорҙа 109 кеше вафат булған. Роспотребнадзор төбәк идаралығының токсикологик мониторинғы мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылдың ғинуар - августа төбәктә химик матдалар менән 2093 киҫкен ағыуланыу осрағы теркәлгән, шуларҙың 394-е, йәки 18,8 проценты үлем менән тамамланған. Өфөлә (22), Стәрлетамаҡта (7), Благовещенда, Күмертауҙа, Салауатта (3-шәр) һәм төбәктең башҡа ҡала һәм районындарында спиртлы эсемлектәр менән ағыуланыуҙан үлем осраҡтары теркәлгән. Сәбәптәре - этанол (49,6 процент) һәм аныҡланмаған спирт (44,3 процент) менән ағыуланыу.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте льготалы ипотека программаларына субсидияларға өҫтәмә рәүештә 100 миллиард һумдан ашыу аҡса бүлде.** Билдәле булыуынса, ғаилә ипотекаһына - 53,4 миллиард, Алыҫ Көнсығыш һәм Арктика ипотекаһына - 9,6 миллиард, ә льготалы ипотекаға (2024 йылдың 1 июлендә тамамланды) элек бирелгән кредиттар буйынса процент ставкаһын субсидиялауға 37,4 миллиард һум йүнәлтелә. "Карар программалар менән файҙаланыу мөмкинлеген һаҡлап ҡалырға һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртырға теләгән граждандарға ярҙам күрһәтергә мөмкинлек бирәсәк", - тип белдерҙеләр федераль министрҙар кабинетында.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓8 августан 8 сентябргә тиклем дауа иткән хәүефле метеорологик күренеш - тупраҡтың артыҡ дымланыуына бәйле Башҡортостандың ҡайһы бер районындарында ғәҙәттән тыш хәл режимы индереүҙәре, предприятиелар уңышты юғалтҡан өсөн страховка алыуҙары мөмкин. Әле Ауыл хужалығы министрлығы тейешле ҡарар ҡабул итә. Был хаҡта ведомство башлығы - республика хөкүмәте вице-премьеры Илшат Фәзрахманов оператив кәңәшмәлә белдерҙе.

✓Республиканың Урман хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл Башҡортостанда яҡынса 470 гектар майҙанда 1,8 миллиондан ашыу йәш ағас ултыртылған. "Йәшел Башҡортостан" акцияһы сиктәрендә төбәктә 153 яңы аллея барлыҡҡа килгән. Акция сиктәрендә бөтәһе ете меңдән ашыу эре ағас һәм 136 меңдән ашыу башҡа үҫенте ултыртылған. Республикабыҙ иҫтәлекле даталарға бәйле ағастар ултыртылған урындар менән дә айырылып тора. Мәҫәлән, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы айҡанлы "Еңеү", "80", "Еңеү Ватаны" һәм башҡа һүҙҙәр хасил иткән геоглифтар (яҙыу рәүешендә ағастар ултыртыу) барлыҡҡа килгән.

✓Уҙған ял көндәрендә, 13-14 сентябрҙә, Өфө - Айғыр - Белорет маршруты буйынса "Айғыр" тау экспресы 2700-ҙән ашыу пассажирҙы хеҙмәтләндергән. Был унан алдағы ял көндәренән 56 процентҡа күберәк. Пассажирҙарға уңайлы булһын өсөн 13 сентябрҙә был маршрутта йөрөгән "Финист" электропоездының составын 5 вагондан 10 вагондарға тиклем арттырғандар. Һөҙөмтәлә ултырыу урындары һаны 818-гә еткерелгән. 20 сентябрҙә лә "Финист" вагондарының составын 10-ға тиклем арттырыу планлаштырыла. Юлда Ағиҙелдең уң яғы, Дим, Ҡарлыман, Ғәбдүк, Зөйәк, Асы, Инйәр, Айғыр, Юша, Оло Йылға, Сермән туҡталыштары ҡаралған.

✓Башҡортостан Бөтә Рәсәй юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге аҙналығына ҡушылды. Республиканың Дәүләт автоинспекцияһы мәғлүмәттәре буйынса, киң йәмәғәтселектең иғтибарын бәлиғ булмағандар ҡатнашлығындағы аварияларҙы кәметеү проблемаһына йәлеп итеү сараның төп маҡсаты булып тора. Башҡортостан биләмәһендә тематик дәрестәр, конкурстар, викториналар, флешмобтар һәм акциялар ойошторола. Йәмәғәт, йәштәр, ирекмәндәр һәм башҡа ҡыҙыҡһынған ойошмалар вәкилдәре менән берлектә уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре, педагогтар өсөн балаларҙың юл-транспорт ваҡиғаларында имгәнеүен иҫкәртеү буйынса саралар ойошторола.

✓Ҡырмыҫҡалы районының Илтирәк ауылында фельдшер-акушерлыҡ пункты асылды. Яңы медицина пункты заманса талаптарға һәм стандарттарға яуап бирә. Фельдшер эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын ФАП-та ултырып аса, электрон рецепт яҙа, телемедицина консультацияһы үткәрә ала. Тәүге медицина ярҙамын Илтирәк, Яңы Андреевка, Грачевка ауылдарында йәшәгән 800-ҙән ашыу кешеһе аласаҡ.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ҮҘЕҢӘ ЫШАН!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



***Ғәшүрә ЛОҠМАНОВА, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты, тарих фәндәре кандидаты:*** Был һорауға яуап итеп ошондай һүҙҙәр әйткем килә. Һәр ваҡытта ла ауыр замандар булған, бөгөнгө көндө лә илебеҙ еңел булмаған осор кисерә. Ундай мәлдәр бер илдең дә тарихын урап үтмәй һәм ошондай ваҡытта иң мөһиме - кеше булып, айыҡ аҡылды һаҡлап ҡалыу һәм яҡшылыҡҡа ышанысты юғалтмау.

Уҡытыусы булараҡ, "белем" тигән ябай, әммә мөһим хаҡиҡәткә баҫым яһағым килә. Белем, уҡыу, нимәнелер белергә тырышыу, үҫеш һәр ваҡытта ла ҙур көс булды һәм артабан да шулай буласаҡ. Әйе, бәлки беҙ ҙур хәл-ваҡиғаларға йоғонто яһай алмайбыҙҙыр, әммә үҙебеҙҙе бөтә яҡлап та яҡшыртыуҙы, үҫеште контролдә тота алабыҙ.

Бер-беребеҙгә түҙемлерәк булайыҡ, тип әйткем килә. Ауыр ваҡыттарҙа айырыуса яҡындарыбыҙға, дуҫтарға ярҙам ҡулы һуҙыу, кеше бәләһе янынан ситләтеп үтмәү кәрәк. Кешенең ысын байлығы аҡса менән түгел, ә уның изге эштәре һәм тирә-яҡҡа ҡарата булған ихлас мөнәсәбәттәре менән үлсәнә.

Оптимизмды юғалтмайыҡ. Әлегә тиклем таң атмайынса ҡалғаны юҡ, бөтә ауырлыҡтар ҙа үтә, барыһы ла яйлана, иң мөһиме - барған юлыңдан туҡтамайынса алға ынтылыу, үҙеңә һәм иленә ышаныу.

Мәҙәни мираҫыбыҙҙы һаҡлайыҡ. Нәҡ мәҙәни мираҫыбыҙ, милли рухыбыҙ беҙҙе уникаль итә, үҙ-үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға һәм киләсәк быуындарға рухи байлығыбыҙҙы тапшырырға ярҙам итә. Китаптар уҡыйыҡ, музейҙарға йөрөйөк, тарихыбыҙҙы өйрәнәйек, сөнки быларҙың барыһы ла рухыбыҙҙы нығыта һәм артабан хәрәкәт итергә көс-ҡеүәт бирә.

Белемле, ижади ҡарашлы, һәләтле йәштәрҙең булыуын күреп ҡыуанам. Һеҙ - беҙҙең киләсәк. Иртәгәһе көндөң, киләсәгебеҙҙең ниндәй булыуы һеҙҙән - тырышлығығыҙҙан, зыялы булыуығыҙҙан - тора. Һеҙҙең һәр уңышығыҙ, һәр ҡылған изге эшегеҙ - ул дөйөм яҡшылыҡҡа индергән ҙур өләшөгөҙ. Тап йәштәр ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеүгә яңы ҡараштар һәм яңы алымдар индерә ала.

Граждандыҡ позицияһының мөһимлегенә айырым иғтибар иткем килә. Йәмғәт тормошонда, төрлө проекттарҙа әүҙем ҡатнашыу, үҙ идеяларыбыҙҙы тәҡдим итеү - быларҙың барыһы ла беҙҙең граждандыҡ позициябыҙҙы күрһәтә.

Һүҙҙәремде дөйөмләштергәндә, уҡырға, эшләргә, берберенә ярҙам итергә онотмаһаҡ ине, тип әйтке килә. Беҙ бергә саҡта, инде-иңгә терәп торғанда, бөтә ҡаршылыҡтарҙы ла, ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға һәләтлебеҙ.

БЫНАҒАЙЫШ!

# ИЛӘНМӘГӘН-ҺУҒЫЛМАҒАНҒА...

## ышанырғамы, юҡмы?




**Быйыл 1 июлдән коммуналь хеҙмәттәргә йылдағынан артығыраҡ кимәлдә хаҡтар артыуы күптәрҙең аҡса янсығына һуҡмай ҡалмағандыр. Ә ҡайһы берәүҙәр әле был үҙгәреште байҡамай ҙа ҡалған булыуы ихтимал, ни тиһәң дә, сентябрҙә яңы тарифтар буйынса ни бары икенсе тапҡыр ғына - август өсөн хисаплаштыҡ. Ә бына октябрь баштарынан гәҙәттә 7-8 айға һуҙыла торған йылытыу "марафоны" башланғас, 16,7 проценттың "кәттәһе" тулы көсөнә үҙен һиҙҙерәсәк тә инде.**

Экперттар әйтеүенсә, был сик түгел, сөнки илдең көрсөккә килеп терәлгән торлаҡ-коммуналь өлкәһенең бюджетҡа ауыр йөк икәнлеге күптән мәғлүм: һуңғы сиккә етеп туҙған һәм серегән инженер селтәрҙәрен яңыртыу өсөн триллионлаған һумдар кәрәк. Был системаны хәҙер граждандар елкәһенә һалырға тура килә, ләкин беҙҙең хәйерсе аҡсаһы ғына хәлде үҙгәртә аламы һуң? Тарифтарҙың артабан да үҫә барыуы инфляцияла ла сағылып, бының иһә Үҙәк банкка юғары ставкаларҙы тотоп килеү файҙаһына дәлил генә буласағын фаразлаусылар ҙа күп.

Тармаҡ белгестәре һәм экспертар аңлатыуынса, тарифтар артыуҙың сәбәптәре күп һәм төрлө, илдәге бөгөнгө сәйәси-иҡтисади хәлдәр ҙә аңлашыла, ләкин шуныһы аңлашылмай: быға тиклем йылдар элек тә бит тарифтар бер урында ғына торманы. Шунлыҡтан аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр, пенсионерҙар һәм инвалидтар коммуналь түләүҙәрҙә дәүләт ярҙамы - субсидиялар алды һәм әле лә ала. Әммә уны юллау мажаралары шул юлда йөрөгәндәргә генә яҡшы билдәле: ҡырҡ урындан ҡырҡ төрлө ҡағыҙ йыйыу, оҙон-оҙон сираттарҙа тороу күптәрҙе сиргә һабыштырырлыҡ. Хатта енәйәтсене лә шул тиклем энәһенән ебенәсә тикшермәйҙәрҙер, моғайын, тигәнерәк фекер ҡала. Унан һуң субсидия алыу өсөн шарттарҙа ҡаралғанса, ғариза биргән граждандар коммуналь хеҙмәттәргә дөйөм ғаилә килеменең 22 процентттан күберәген түләгән осраҡта ғына хоҡуҡлы, ләкин, мохтажлыҡ кисереп йәшәгән хәлдә лә, әгәр баяғы 22 процент нормаға саҡ ҡына "һыймай" ҡалһа ла, уның ғаризаһы кире ҡағыла.

Дөрөҫ, быңдай нормалар Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә төрлөсә булыуы мөмкин. Мәҫәлән, Мәскәүҙә ул ни бары... 10 процент. Ә Мәскәү яңы ҡалаларында - шул уҡ 22 процент, Башҡортостан буйынса - 20 процент, ләкин шул уҡ ваҡытта күп балалы һәм тулы булмаған ғаиләләр өсөн - 13, ә 70 йәштән үткән һәм яңғыҙ йәшәгән граждандар өсөн - 16, яңғыҙ йәшәгән һәм 60 йәште уҙған ирҙәргә һәм 55-те үткән ҡатындарға 18 процент норматив билдәләнгән. Бынан тыш, субсидия алыу өсөн торлаҡ майҙаны нормативы ла башҡа бик күп шарттарҙың береһе булып тора. Был норматив та төрлө субъекттарҙа төрлөсә. Мәскәүҙә ул, мәҫәлән, кеше башына 33 кв.м. Әгәр торлаҡ майҙаны бер кешегә нормативтан артып китә икән, субсидияға өмөт тотма!

Ҡыҫҡаһы, бөгөнгө көндә коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн дәүләт ярҙамы алырға теләүселәр юлында йығып сыҡҡыһыҙ закон пункттары һәм кәртәләр менән осрашырға тура килә. Бөтөн был ыҙалар 6 айҙан һуң кәсөн юғалта һәм граждандар яңынан ғариза яҙырға һәм янына теге "ҡырҡ төрлө" документ юллау ҡуласаһында әйләнергә тейеш була. Шуға күрә быңдай ауыр һынауҙы үтә алмайынса, күптәр субсидия тигән ынтылыштарынан төшөнсәнән өмөтөн өҙөп, яртылыҡ юлында уға ҡул һелтәп тә ҡуя. Һәр хәлдә, шундай бер нисә таныш кешене

БАШ ҠАЛАМ

# КҮГӘРСЕН ТОТҠАН ҠЫҘ...

## Өфөбөҙгә ҡайтһын әле

**(Башы 1-се биттә).**



Ҡала башлығы үҙенең телеграм каналында Өфөнән аэропорт яғына сығыусы юл эргәһендә совет йылдарында тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ символын кәүҙәләндергән күгәрсен тотҡан ҡыҙ скульптураһын ҡайтанан тергеҙеү теләге тураһында өфөләргә мөрәжәғәт итте. Ағиҙел аша күперҙең реконструкцияһы тамамланыуға был скульптура ла урынына ҡайтһа, бик яҡшы булыр ине, тип уйлайым. Атайымдың һөйләүе буйынса ул ҡалаға ингәндәрҙе ҡаршы алып һәм Өфөнән алыҫ юлға сыҡҡандарҙы оҙатып тороусы һәйкәл булып ҡабул ителгән. Был тарихи символдың ҡалаға ҡайтарылыуын түҙемһеҙлек менән көтәм.

Өфөнөң ҙур, масштаблы спорт саралары үҙәге булыуын һәм меңәрләгән спорт һөйөүселәрҙе бергә туплаған ҡала икәнлеген дә бөтә республика күреп-белеп тора. Яңыраҡ уҙған XI Халыҡ-ара Өфө марафо-

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда йәшәүселәр халыҡ участковыйы өсөн тауыш бирә ала. Сираттағы "Халыҡ участковыйы" Бөтә Рәсәй конкурсы 11 сентябрҙә старт алды. Ил халыҡсан полиция хеҙмәтенән иң яҡшы тәртип һаҡсыһын һайлай. Башҡортостанда йәшәүселәрҙе онлайн тауыш биреүҙә ҡатнашырға саҡыралар. Һәр этапта ла еңеүселәр халыҡтың күпселек тауышы менән билдәләнә. Лайыҡлы тип иҫәпләгән полиция хеҙмәткәрен һайларға һәм уның өсөн тауыш бирергә кәрәк. Өфөнән ете участковый ҡатнаша, ә республиканан йәмғеһе - 54 хеҙмәткәр.

✓Республикабыҙ бәһлеүәндәре 4 октябрҙә Стәрлетамаҡта "Тополь-М" ауыр ракета комплексын һөйрәү буйынса донъя рекордын ҡуйырға йыйыналар. Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин һүҙҙәренсә, рекорд ҡуйыуҙа уның командаһы, Башҡортостандың дүрт көслө спортсыһы Денис Вахапов, Раил Бикмаев, Айҙар Байсурин һәм Руслан Садиҡов ҡатнаша. Ошо көндәрҙә предприятие биләмәһендә тәүге асыҡ күнекмә үтте. Рекордты теркәргә "Уралстронг - Силачи Руси" федерацияһы президенты Дмитрий Кононец саҡырылған.

✓"Ирәмәл" тәбиғәт паркы етәкселеге туроператорҙарҙың автомобилдәренә йөрөүҙе ваҡытлыса сикләне. Был яуым-төшөмдөң күп булыуына бәйле. Башҡортостандың Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре дирекцияһынан ошо турала хәбәр иттеләр. Ҡарар юлдарҙың емерелеүенә юл ҡуймау һәм тәбиғәт паркының уникаль ландшафтын һаҡлап ҡалыу маҡсатында ҡабул ителгән. Сикләү "Әүнәр" (Белорет районы) һәм "Байһаҡал" (Учалы районы) контроль-үткәреү пункттарында һауа торошо яҡшырғансы ғәмәлдә ҡала. Йәйәүле туристар паркка ғәҙәттәгесә инергә мөмкин.

✓Башҡортостандың дәүләт автоинспекцияһы "Законлы водитель" махсус операцияһы үткәрҙе. Сараның маҡсаты - водитель таныҡлығы булмаған, шулай уҡ машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителгән водителдәр менән юл-транспорт ваҡиғаларын иҫкәртеү. Юл-патруль хеҙмәте инспекторҙары эскән килеш рулгә ултырыу осраҡтарына айырыуса иғтибар йүнәлтте. Операцияла дәүләт автоинспекцияһының, шулай уҡ эске эштәр органдарының башҡа хеҙмәттәренең шәхси составы ҡатнашты.

✓Республикала биш бала юл фажиғәһендә зыян күргән. Авария Ғафури районында булған. Еңел машина Аҡташ ауылына боролғанда юл ситенә сығып осҡан. Рулдәге әсә алты баланы һәләк итә яҙған. Уларҙың иң бәләкәйенә - 2 йәш. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин хәбәр итеүенсә, водитель медицина ярҙамынан баш тартҡан. Биш бала Стәрлетамаҡ дауаханаһына оҙатылған. Улар араһында ауыр пациенттар юҡ, тип асыҡлыҡ индерҙе ведомство етәксеһе. Балалар табиптар күҙәтеүендә.

✓ **Ысынлап та, Мәскәү кеүек бай субъектта нормативтың 10 процентҡа кәметелеүе, ә дотацияла көн итеүсе төбәктәр өсөн иң юғары (22 процент) күрһәткестең һаҡланып ҡала килеүе бер ҙә ғәҙел ғәмәл түгел.**



беләм. Их, тиғән уй килә башҡа: ниңә беҙҙә ришүәтсе һәм бур чиновниктарға ла йылына ике тапҡыр шундай тиҡшереү үткәрелмәй икән ул?..

Ниһайәт, был өлкәлә мохтажлыҡ кисереүсе ғаиләләргә еңеллек килтерергә кемдәрҙәндер баштары еткән, тиҙәр. Быға ышаныуы ла ҡыйын, әлбиттә, ләкин коммуналь түләүҙәргә субсидиялар иҫәпләү тәртибен еңеләштерергә ниәтләйҙәр икән, бойомға ашыра алһалар. Дәүләт Думаһының социаль сәйәсәт буйынса комитет етәксеһе Ярослав Нилов граждандарҙың ғаилә бюджетынан коммуналь хеҙмәттәргә сығымдар өлөшөн кәметеү буйынса тәҡдим индергән. Ысынлап та, Мәскәү кеүек бай субъектта нормативтың 10 процентҡа кәметелеүе, ә дотацияла көн итеүсе төбәктәр өсөн иң юғары (22 процент) күрһәткестең һаҡланып ҡала килеүе бер ҙә ғәҙел ғәмәл түгел. Нилов әйтеүенсә, был закон проектын ҡабул итеү социаль көсөргәнеште кәметергә, ярлы ғаилә һәм граждандарға коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙе еңеләштереп, был өлкәлә бурыслы булып торғандар һанын кәметергә ярҙам итәсәк. Шул уҡ ваҡытта был сара илдең коммуналь предприятиелары эшендә лә ыңғай күренеш буласаҡ. Ғәжәпкә күрә, Рәсәй торлаҡ ойошмалары союзының идаралыҡ рәйесе Константин Крохин Дәүләт Думаһына индерелгән был закон проектының Хөкүмәт тарафынан хупланыуына ышаныс белдермәй; сөнки, ти ул, бөгөнгө ҡаҙна наҡыҫлығы шарттарында субсидия бик күп өҫтәмә аҡса талап итәсәк. "Бик күп", эйе, дөрөҫ, сөнки дәүләт ярҙамына мохтаждар ҙа бик күп бит... "Бер генә юл бар: кемдәрҙер өлөшөнә инеп, уның аҡсаһын "коммуналкаға" йүнәлтмәгәндә инде",- тип аптырана Крохин.

Баяғыса, "бик күп" тигәндән, бөгөн илдәге халыҡтың 10-13 проценты субсидия ала, ә мохтаждар һаны тағы ла күберәк. Дөрөҫ, Росстаттың икенсе кварталға йомғаҡтары буйынса, йәшәү минимумынан түбәнерәк килемле рәсәйҙәр һаны былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 7,4 процентҡа кәмегән һәм йөмғеһе 10,8 млн кеше тәшкил итә (фәҡирлек кимәле сигенең былтыр 16 863 һум булыуын иҫтә тотоп). Шулай ҙа, тип әйтелә Росстат мәғлүмәттәренә анлатма материалында, 11 мең фәҡир ҙә бөгөн Рәсәй өсөн байтаҡ һан. Ошолар хаҡында уйлаһаң, әлеге яҡшы хәбәргә алдан ҡыуаныу урынлыһыҙ икәне аңлашыла. Ни тиһәң дә, "иләнмәгән-һуғылмаған" ыштанға өмөт итмәй тороу хәйерлерәктәр ҙә, бәлки. Халыҡ бит хаҡ һүҙҙе белмәйенсә әйтмәгән...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

нында ғаиләбеҙҙән барыһы ла ҡатнашты. Төрлө алыҫлыҡтағы араға кем йүгереп, кем атлап үттек. Тән яҙылып, уйҙар асылып, күңел көрәйеп ҡайттыҡ.

Ялдарын Ғафури паркында йөрөргә яратабыҙ. Унда йүгерешеп йөрөгән тейендәрҙе ашатабыҙ, саф һауа һулайбыҙ. Өфөбеҙҙең ошондай ғаилә, дуҫтар менән барып ял итергә мөмкин булған йәшел утрауҙарының күп булыуына һөҡланам. Һаҡлап ҡалырға ине ошо матурлыҡты.

Салт аяҙ көндә, ял көнөндә, ауыл хужалығы йәрминкәләренә барып ҡайтыуы үҙе бер ғүмер. Төбәктең төрлө районларынан килтерелгән еләк-емештең, йәшелсәнең күплеге хайран итә. Йәйлап йөрөп ит һайлайбыҙ, бал тәмләп ҡарап һатып алабыҙ, картуфты ла бер ҡышҡа етерлек алып ҡайтабыҙ. Ғәҙәт буйынса, алыҫ булһа ла Спорт һарайы алдындағы йәрминкәгә йөрөүҙе хуп күрәбеҙ. Йылдар дауамында унда һатыу иткән таныш-тонош та күбәйеп китте. Ауыл хужалығы йәшәһен, ауыл уңғандары гөрләп йәшәһен, сөнки ауыл булғанда тормош дауам итәсәк.

Уҡыу йылы башында Өфөнөң Еңеү урамында 14-се һанлы музыка мәктәбен асыу тантанаһында булып, һөләтле балаларҙың, үҙ эшен яратып башҡарған уҡытыусыларҙың йыр-моңон тыңланыҡ. Ейәнем ҡурай класына уҡырға барҙы, уның өсөн ҡыуанып бөтә алмайым. Бындай башланғыстар күберәк булһын, балалар өсөн мөмкинлектәр асылып торһон.

Өфөбеҙ һәләмәк кенә үҙ тормошо менән йәшәй. Өйрәнелгән, таныш һәм ҡәҙерле урамдарҙан үтеү, ошо миллионлы ҡалаға ҡағылышың булыу дәртләндерә лә, шатландыра ла.

**Рафиҡ ӘЛИБАЕВ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# КИЕВ РЕЖИМЫ БРИТАНИЯ ҠУЛЫНДАМЫ?

**РФ Оборона министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Махсус хәрби операция башланғандан алып, Украина Ҡораллы көстәре үҙенең 667 самолетын, 283 вертолетын, 84 069 пилотһыҙ осоу аппаратын, 628 зенит ракета комплексын, 25 096 танкын һәм броняла хәрби машинаһын, 29 555 ялан артиллерияһы орудиеһын, 41 743 берәмек махсус авиомобиль техникаһын юғалтты.**

Шуға ҡарамаҫтан, Украина армияһы үҙенең шартлатҡыс осоу аппараттары менән Рәсәй күгенә һөжүмен дауам итә. Үткән бер тәүлек эсендә генә лә Рәсәй Һауа һөжүменә ҡаршы оборона системалары самолет тибындағы 361 дошман дронын, идара ителеүсе дүрт авиация бомбаһын һәм АҠШ-та етештерелгән HIMARS реактив снарядын атып төшөрҙө. Ләкин, ҡыҙғаныска, шартлатҡыс осоусы аппараттарҙың ҡайһы берҙәре тәғәйен объекттарын таба. Ана шундай дрондарҙың икеүһе, белеүегеҙсә, 13 сентябрҙә Өфөгә лә килеп етте хатта. Уларҙың береһе күҙәтеү аҫтында була һәм Өфө нефть эшкәртеү заводының һаҡ хеҙмәткәрҙәре тарафынан атып төшөрөлә. Бәхеткә, зыян күреүселәр һәм ҡорбандар юҡ, дрон һыныҡтарынан тоҡанған янғын тиҙ арала һүндерелә. Икенсе дрон предприятиенан ситтә шулай уҡ атып төшөрөлә. Ә 13 сентябргә ҡарай төндә Рәсәй территориялары буйынса ошондай уҡ самолет рәүешендәге 42 аппарат бәреп төшөрөлә. Бындай һөжүмдәрҙән айырыуса Белгород, Брянск, Ростов, Волгоград, Курск өлкәләре, Ҡырым Республикаһы ҙур зыян күрә.

Икенсе яҡтан, АҠШ президенты Дональд Трамптың Рәсәйгә ҡаршы нефть баҙарында сауҙа һуғышы башланды. Трамп Рәсәй нефте менән газын донъя баҙарынан ҡыҫырыҡлап сығарып, уның урынына үҙ продукцияһын тәҡдим итмәксе. Ошо маҡсатта Рәсәй нефтенән тулыһынса баш тартыуын талап итеп, Һиндостан менән Ҡытайға нығ ҡына баҫым яһала. Талап үтәлмәгән хәлдә, Трамп Һиндостан менән Ҡытай тауарҙарына 50 процент пошлиналарҙың һаҡланып ҡаласағын белдерә һәм өҫтәүенә, Евросоюзды ла уларға ҡаршы һөсләтмәксе була, ләкин Европа бындай ҡаты сараларға ризалығын бирмәгән әле. Әгәр Һиндостан Рәсәй нефтенән тулыһынса баш тартһа, Вашингтон уның тауарҙарына пошлинаны ике тапҡырға кәметеп, 25 процентҡа ҡалдырмаҡсы. Ә был иһә Нью-Дели өсөн яҡшы ташлама, сөнки илдә эске ҡулланыу кимәленең кәмеүе күҙәтелә. Шул сәбәпле Һиндостан импортерҙары Рәсәй нефть һатыусыларынан биш тапҡырға тиклем ташлама яһауҙы талап итә башланы. Шунлыҡтан, ҡайһы бер һатыусылар танкерҙарҙы Ҡытайға йүнәлтергә мәжбүрҙәр.

Нисек кенә булмаһын, Һиндостан Рәсәй яғыулығынан тулыһынса баш тарта алмаясаҡ, тип күҙаллай экспертттар, сөнки илдең нефть эшкәртеү заводтары Рәсәй инвестициялары ҡатнашлығында Urals нефте үҙенсәлектәрен һәм сифатын иҫәптә тотоп төҙөлгән. АҠШтың юғары пошлиналар менән янауына ҡарамаҫтан, Ҡытай ҙа Рәсәй нефтенән баш тартмаясаҡ, сөнки Пекин энергия ресурстары менән тоторҡоло тәьмин итә яҡлы. Был йәһәттән хатта ки АҠШ-тың союздашы Япония ла үҙенең энергетика хәүефһеҙлегенә ҡаршы бара алмай, сөнки Mitsubishi компанияһы "Сахалин-2" проектының акционеры булып тора (22,5 процент).

АҠШ шулай ҙа 2027 йылдан Евросоюзды Рәсәй нефтенән тулыһынса баш тартырға күндерҙе тәки: Америка был илдәргә үҙенең яғыулыҡ продукцияһын һатасаҡ. Шул уҡ ваҡытта Евросоюз тарафынан әҙерләнә башлаған санкцияла Рәсәй энергия ресурстарын сикләү ҡаралмай: әлегә ЕС һатып ала торған тәбиғи газдың 13 проценты Рәсәй тарафынан тәьмин ителәсәк. Ошондай һәм башҡа төрлө ҡатмарлыҡтарға ҡарамаҫтан, Рәсәйҙең энергия ресурстарын донъя баҙарынан ҡыҫырыҡлап сығарыу мөмкин булмаясаҡ, тиғән фекерҙә күҙәтеүселәр. Өҫтәүенә, Американың тау тоҡомдары ҡатламынан алыныусы сланец нефтенең үҙкиммәте Рәсәйҙекенә ҡарағанда күпкә ҡиммәтерәк тә. Рәсәй яғыулыҡ менән өҫтәмә сауҙа баҙарын Азия һәм Африка илдәренән дә таба алырға мөмкин. Унан һуң санкциялар ил эсендә нефть эшкәртеү һәм химия сәнәғәтен үҫтерергә этәргес кенә булып сығыуы ла ихтимал.

Һуңғы яңылыҡтарҙан: "Комсомольская правда"гәзитенең хәрби журналисы Александр Коц хәбәр итеүенсә, Британия яңы халыҡ-ара штаб (MNF-U) ойошторолоу һылтауы менән Украина Ҡоралты көстәре менән оператив командалыҡ итеүҙе АҠШ-тан үҙ ҡулына алды. Коц билдәләүенсә, англосаксттар хәҙер Украина эсендә лә, Рәсәй территорияһында ла Киев режимының бөтөн хәрби операциялары өсөн дә туранан-тура яуап бирәсәк. Әйткәндәй, ВСУ тәртибендәге "британия стиле" һуңғы ваҡыттарҙа йышая барыусы террактарҙан да асыҡ күренә башлағайны инде. 1 сентябрҙә Лондон Киев режимына ярҙамға тоҡтарландырылған Рәсәй активтарынан алынған 1 млрд доллар аҡса ебәрҙе. Бындай үҙгәреш көнбайыш ниәттәренең Украина конфликтын тиҙ арала ғына тыныс көйләүгә йүнәлтелмәүен, киреһенсә, уның оҙайлы ҡапма-ҡаршылыҡҡа иҫәп тотолоуын күрһәтә.

Һүҙ ыңғайында шуныһы ла мәғлүм булһын: Лондон халҡы законһыҙ миграцияға ҡаршы ҙур митинг акцияһы ойоштороп, урамдарға сыҡты һәм премьер-министр Кир Стармерҙың илдә тәртип булдыра алмауына ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Британия сәйәсәтенән арыған халыҡ власть башына лейбористарҙың да, консерваторҙарҙың да килеүен теләмәй, шуның өсөн дә протест яңы көстәр тарафынан ойошторолғайны, улар Рәсәй менән эшлекле диалог яҡлы булыуҙарын белдерҙе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда бензин йәнә ҡиммәтләнде, бөтә позицияларҙа тиерлек хаҡ 30 тингә артты. "Башнефть" 2 сентябрҙә лә хаҡты арттырғайны. Хәҙер водителдәргә АИ-92 маркалы яғыулыҡтың бер литры өсөн 57,55 һум түләргә тура килә (+ 30 тин), АТUM-92 - 58,65 һум (+30), АИ-95 61,4 һум (+30 тин) тора, АТUM-95 иһә 62,55 һумға һатыла. Дизель яғыулығы - 68,6 һум, АИ-100 маркалы бензин - 80,65 һум. Башҡа компаниялар менән сағыштырғанда, мәҫәлән, IRBIS АЗС-да АИ-92 - 57,99 һум, АИ-92 XTRim - 58,99 һум, АИ-95 XTRim - 64,99 һум, ДТ 66,99 һум тора.

✓Өфөлә "Урам байрамы" урам спорты фестивалендә "Динамо" клубының үҫмерҙәр һәм йәштәр командаларының презентацияһы уҙҙы. Милли кейем көнө уңайынан баскетболсылар спорт һөйөүселәр алдына башҡорт бүрегендә сыҡты. Быйыл "Динамо" баскетболсылары Юғары лигала еңгәндән һуң тәүгә Рәсәй чемпионатында Суперлигала сығыш яһаясаҡ.

✓Өфөнән Ҡаҙанға рейстар арта. "Икар" авиакомпанияһы ошо йүнәлеш буйынса рейстар һанын арттыра. "Өфө" аэропортының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, 18 сентябрҙән осоштар аҙнаһына өс тапҡыр (дүшәмбе, йома һәм шаршамбы) башҡарыла. 2 октябрҙән аҙнаһына 5 рейс була. Осоштар дүшәмбе, шишәмбе, кесаҙна, йома һәм шәмбе көндәренә билдәләнгән. Бөтә рейстар ҙа заманса Embraer 190 самолеттарында башҡарыла. Лайнер 110 пассажир өсөн иҫәпләнгән.

✓Республика тире-венерологик ауырыуҙар диспансерына балтырған сапҡандан һуң тәне бешкән ирҙе алып килгәндәр. Мәғлүм булыуынса, ул шорты кейгән килеш баҡсаһын үләндән таҙартҡан. Тәүҙә ир өйҙә дауаланып маташҡан. Тик бынан һуң хәле насарайған. Температураһы күтәрелгән, тәне сабыртып бешә башлаған. Дауаханала баҡсасыны дауалап сығарғандар, әле уның хәле яҡшы, тип хәбәр итәләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Ағыулы балтырғандың үтә хәүефле булыуын иҫтә тотоу мөһим. Үләнде тотҡандан һуң III дәрәжә тән бешеүе алырға йә ҡурҡыныс аллергик реакция булырға мөмкин.

✓Көҙҙөң беренсе аҙнаһында Республика клиник перинаталь үҙәгендә 269 сабый, шул иҫәптән өс игеҙәк бала донъяға килгән. Был хаҡта медицина учреждениеһынан хәбәр иттеләр. Билдәләнеүенсә, йыл башынан Өфөнөң Республика клиник перинаталь үҙәгендә генә 7 меңдән ашыу сабый тыуған. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың 8 айында Башҡортостанда 21 меңдән ашыу бала донъяға ауаз һалған.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ Өйҙә генә башланған эшмәкәрлек хәрәкәте үҫеп, киңәйеп, бөгөнгө көндә йөҙләгән кешене берләштергән, баш ҡаланың төрлө районында - биш, Салауат ҡалаһында бер оҫтаханаһы булған ҙур проектҡа әйләнде.



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Ир-атҡа үә ҡатын-ҡыҙға тыйыу

Хаҡ Тәғәлә Һауаға әйтте: "Хата эш ҡылдың, шул сәбәпле яланғас ҡалдың, бәләгә керергә сәбәп булдың, Әҙәмде лә ҡайғылы, яланғас иттең". Аллаһы Тәғәләнән хитап ҡылынды: "Әй, Һауа, йәннәттән сыҡ, һине ун биш бәлә менән һынаясаҡбыҙ. Был гонаһ шомлоғонан ҡыҙҙарың Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр һыналыр. 1. Хәйез (күрем), нифас ҡаны ҡыҙҙарыңа аманат булһын. 2. Туғыҙ ай бала күтәрһендәр. 3. Бала тапҡанда үлем әсеһен татыһындар. 4. Ғиҙҙәт михнәтен сикһендәр. 5. Ирҙәре хөкөмөндә һәм ирегендә булһындар. 6. Талаҡ ирҙәр ҡулында булһын. 7. Мираҫта яртылаш кәм ҡалһындар. 8. Шәһәҙәт биреүҙә. 9. Аҡылда. 10. Диндә кәм булһындар. 11. Сәләм биргәндә мәхрүм булһындар. 12. Йома намаҙҙарынан һәм йәмәғәт менән уҡылған намаҙҙарҙан. 13. Пәйғәмбәрлектән. 14. Батша булыуҙан, хәлифәлектән. 15. Мәхрәмһеҙ сәфәр ҡылыу хәрәм булһын".

Бер риүәйәттә һөйләнелеүенсә, ғүмере мең йәшкә еткәс, Әҙәм ауырып китә. Балаларын йыйып, Аллаһы Тәғәләнең тыйыуҙарына, әмеренә буйһонорға, шайтанға ҡаршы торорға, ҡатындарға йөрөмәҫкә бойора. Барса нәсихәттәрҙән, васыяттарҙан биш васыят менән ғәмәл ҡылырға, балаларға уларҙы кәңәш, теләк итергә ҡуша. 1. Донъяға күңелемде бағламаным, ожмахҡа бағланым, мәшәҡәт күрҙем. 2. Һәр эштең аҙағын уйла, эшемдең ахырын уйламағаным өсөн ошо хәлгә төштөм. 3. Ҡатын һүҙенә ҡарама. Мин ҡатын һүҙенә ҡарап, бәләгә тарыным. 4. Һәр эште кәңәшләш, әгәр мин тыйылған емеште ашамаҫ элек фәрештәләр менән кәңәшләшһәм, был бәләгә төшмәҫ инем. 5. Теләһә ҡайһы эште башлағанда эсең бошһа, ул эште ҡалдыр. Бойҙай ағасына яҡын барғас, күңелем тулҡынланды, эсем бошто. Ашағандан һуң ожмахтан сығарылдым. Бынан тыш, Әҙәм балаларына Мөхәммәт Мостафа бәйғәмбәрҙең нурын яҡшы һаҡларға ҡушты. Сөнки Хаҡ Тәғәлә Мөхәммәт ғәләйһиссәләм нурынан Әҙәмде бар ҡыла, ул нур Әҙәмдән Һауа инәгә күсә.

"Бәйғәмбәрҙәр тарихы" китабында әһәмиәт бирелеүенсә, ҡатын-ҡыҙға ла, ир-егеттәргә лә нәфселәрен тыйыу фарыз. Йософ ғәләйһиссәләм әйтә: "Хәҡиҡәттә нәфсе яуызлыҡҡа бойороусы, әҙәмдәрҙең нәфсеһе ҡылған боҙоҡлоҡто етмеш шайтан ҡыла алмаҫ". Башҡорт халыҡ әйтемдәре лә нәфсехур, йәғни нәфсе ҡоло булыу яман ҡылыҡ икәнен аңғарта: нәфсеһенә эйәргән шайтанға эйәрер; нәфсеңде ҡыуа бирһәң - нәфсең туймаҫ булыр, нәфсеңде тыя бирһәң - нәфсең йыуаш булыр; нәфсенең сиге юҡ; нәфсене һимертһәң - үҙеңә бәлә өҫтәр...

Ир - ҡатын мөнәсәбәттәренә бәйле серҙе сисмәү тыйыуы ла күҙәтелә. Был грек һәм Рим мифологияһында ла сағылған. Ида тауы буйында көтөү көтөп йөрөгән Анхис янына уның матурлығына хайран мөхәббәт һәм гүзәллек алиһәһе Афродита килә һәм үҙен Отрей батша ҡыҙы итеп таныта. Яҡынлыҡ ҡылғандан һуң Афродита Анхисҡа унан Эней исемле данлы батырҙы тыуҙырасағын әйтә, әммә был серҙе бер кемгә лә сисмәҫкә ҡуша. Ләкин дуҫтары менән һыйланғанда, Анхис тыйыуҙы боҙа һәм шуның өсөн уны Зевс йәшене ата. Тимәк, ир-егеткә ҡатын-ҡыҙҙың яманатын һатыу тыйыла.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# БЕРҘӘМ ҠАЛҠАН БУЛЫП ҠАЛҠТЫҠ!

**Махсус хәрби операция башланған көндән алып тылдағылар ҙа яугирҙарға ярҙам итер өсөн берҙәм булып тупланды. Бөгөнгө көндә республикала бихисап ирекмәндәр хәрәкәте эшләп килә. Улар араһында "Үҙебеҙҙекеләр өсөн тегәбеҙ һәм бәйләйбеҙ. Башҡортостан" ирекмәндәр хәрәкәте иң ҙурҙарҙан һанала. Уның эшмәкәрлеге хаҡында хәрәкәт рәйесе Гөлдәр СИБӘҒӘТУЛЛИНА һөйләй.**




- Беҙҙең ирекмәндәр хәрәкәте 2022 йылда барлыҡҡа килгән. Барыһы ла фронттағыларға ярҙам итеү кеүек дөйөм маҡсат менән берләшкән энтузиастар төркөмөнән башлана. Өлөшләтә мобилизация иғлан ителгән мәлдән алып яугирҙар яҙмышына, илебеҙ киләсәгенә битараф булмаған ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең күңел йылыһын биреп, күҙ нурҙарын түгеп, изге теләктәр менән һуғарып, йылы кофта, футболка, нәски, ойоҡбаш һәм башҡа кейемдәр тегәләр һәм бәйләйҙәр. Шулай уҡ беҙҙең ирекмәндәр снарядтар өсөн рюкзак, носилка тегәләр, маскировка селтәрҙәре үрәләр.

Өйҙә генә башланған эшмәкәрлек хәрәкәте үҫеп, киңәйеп, бөгөнгө көндә йөҙләгән кешене берләштергән, баш ҡаланың төрлө районында - биш, Салауат ҡалаһында бер оҫтаханаһы булған ҙур проектҡа әйләнде. Әлеге мәлдә оҫтаханалар Өфөнөң Дан бульварында, Ҡала советы районында, Әй һәм Ферин урамдарында әүҙем эшләй, шулай уҡ Республика ҡан ҡойоу станцияһы хеҙмәткәрҙәре лә беҙгә ярҙам итә - унда ҡуйылған махсус ҡоролмала буш ваҡыттарында селтәр үрә улар. Беҙҙең эшмәкәрлеккә ҡушылыуҙарына рәхмәтлебеҙ. Тағы ла Салауат ҡалаһында эшләгән ирекмәндәрҙе билдәләп үткем килә. Ике йылдан ашыу инде Айгөл Вәлишина етәкселегендә ҡатын-ҡыҙҙар беҙгә ныҡлы ярҙам күрһәтә. Беҙ Өфөнән әҙерләп, материал ебәрәбеҙ, улар үҙҙәренең ялында ательеға барып, толстовкалар тегә. Ике ҡала араһында тығыҙ һәм эшлекле бәйләнеш булдырылған.

Һәр оҫтахананың үҙенең тәғәйенләнеше бар: туҡыма, фурнитуралар запасы һаҡланғаны, бәйләм өсөн кәрәкле материалдар менән тулыландырылып торғаны, әҙер изделиеларҙы туплау, һаҡлау, оҙатыу өсөн әҙерләү процесы алып барылғаны һәм башҡалар. Һәр бер оҫтаханала шулай уҡ төрлө әйберҙәр тегелә, селтәрҙәр үрелә. Тағы ла оҫтахананан туҡыма йәки йөн килеп алып, өйҙәрендә эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар бик күп. Әлеге мәлдә беҙҙең хәрәкәт ағзалары тарафынан 30-ҙан ашыу төр изделие етештерелә, уның ассортиментын киңәйтеү күҙаллана. Эшмәкәрлек башланғандан алып ирекмәндәр тарафынан яугирҙарға 100 меңдән ашыу әйбер ебәрелгән. Һәр бер етештерелгән, фронтҡа ебәрелгән әйберҙең мотлаҡ теркәлеп барыуы эшебеҙҙе тәртиптә тоторға ярҙам итә. Сифат йәһәтенән дә үҙебеҙгә ҡарата талап ҡаты, илке-һалҡылыҡ юҡ. Ғөмүмән, командабыҙ бер төптән булып, бер маҡсатҡа ынтылып эшләй: берәүҙәр финанс менән шөғөлләнә, икенселәр бина эҙләй һәм уны рәткә килтерә, өсөнсөләр социаль селтәрҙәр алып бара һәм башҡалар.

Беҙ бәйләп һәм тегеп ебәргән кейемдәр, етештергән башҡа кәрәк-яраҡ яугирҙарыбыҙға әҙ генә булһа ла еңеллек килтерһә, дошман утынан һаҡлап ҡалыуҙа ярҙам итһә, һыуыҡтарҙа йылытһа, тимәк, тырышыуыбыҙ юҡҡа түгел. Рәхмәт һүҙҙәре тулы хаттар алып, видеояҙмалар ҡарап ҡыуанабыҙ. Һәр әйбергә һалынған йылылыҡ һәм хәстәрлек өсөн рәхмәт һүҙҙәре күңелгә үтеп инә, беҙҙең өсөн иң яҡшы бүләк булып тора.

Бәләкәй идеянан башланып, ҙур хәрәкәткә әйләнгән "Бәйләйбеҙ һәм тегәбеҙ. Башҡортостан" ирекмәндәр хәрәкәте, яугирҙарыбыҙ, илебеҙ яҙмышына битараф булмаған йөҙәрләгән кешеләрҙе берләштергән ҙур проекттың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Бер-береңә терәк булыу, кешелеклелек һәм изге йөрәклелек ошондай минуттарҙа, илгә хәүеф янағанда берҙәм ҡалҡан булып ҡалҡыуҙа, сағыла ла инде.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ӘБЙӘЛИЛ ХӘБӘРЕ

# МАТУР ЙОЛА ҠАЙТА

**Әбйәлил районы "Ҡыҙыл Башҡортостан" хужалығы механизаторы Заһит Фәхрисламовтың тәүге мең тонна иген һуғып алыуы тантаналы сара итеп билдәләнде һәм уның комбайынына совет осорондағы кеүек йондоҙ беркетелде. Был ваҡиғаны легенда ҡайтыуына тиңләргә була, ти ауыл хеҙмәтсәндәре.**



"Хеҙмәт кешеләренә ҡарата ихтирамды тергеҙергә кәрәк беҙгә. Тыуған илгә һөйөү, илһөйәрлек ошонан башлана ла инде", - ти хужалыҡ етәксеһе Раил Салауат улы Фәхрисламов. Был яңы тергеҙелгән традицияны ауыл хужалығы етәкселеге премия менән дә нығытып ҡуйған. Тәүге мең тонна өсөн 50 мең һум күләмендә аҡса бүләк ителгән механизаторға. Ә ике мең тоннаға иһә премия күләме 150 мең буласаҡ, тип вәғәҙәләнгән.

Комбайнға беренсе йондоҙ беркетеү тантанаһына Әбйәлил районы хакимиәте башлығы Айрат Әминев, ауыл хужалығы һәм мобилизация буйынса хакимиәт башлығы вазифаһын башҡарыусы Ирек Хәсәнов, шулай уҡ 1980 йылда республикабыҙҙың төп аграр юғары уҡыу йортон тамамлаған 47 кеше килгәйне. Был көндә баҫыуҙа йәштәрҙең - Урғаҙа ауылында урынлашҡан Урал аръяғы агросәнғәт колледжында белем алыусыларҙың да булыуы айырыуса шатлыҡлы күренеш булды. Йәш белгестәр тәжрибәле хеҙмәттәштәре менән аралашты, уларҙың иҫтәлектәрен, кәңәштәрен тыңланы.

Нәҡ элеккесә, йондоҙ эйәһенә бағышлап район мәҙәниәте йорто хеҙмәткәрҙәре концерт номерҙары ла әҙерләгәйне. Йырлы-моңло байрам Урал аръяғы далаларында илде туйындырыусыларҙың хөрмәткә һәм ихтирамға лайыҡ икәнлектәрен иҫбатлаусы билдә булды. Ә Заһирҙың комбайнында тағы ла йондоҙҙар һаны артыр әле. Башҡортостан баҫыуҙарында бындай йондоҙҙар балҡығанда икмәгебеҙҙең киләсәге буласаҡ.

ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

**Салауат Хәмиҙуллин, тарих фәндәре кандидаты, билдәле тележурналист: "Өфө - миллионлы мегаполис, Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы, XIX быуатта - Өфө губернаһының, XVIII быуатта - Өфө йәғни Башҡорт провинцияһының, XVI-XVII быуаттарҙа - гигант арауыҡты биләгән Өфө өйәҙенең үҙәге. Уның биләмәләрен көнсығышта Тобол йылғаһынан алып көнбайышта Волгаға, төньяҡта Кама йылғаһынан көньяҡҡа табан Эмбаға тиклем йәйрәп ятҡан аҫаба башҡорт ерҙәре хасил иткән. Урта быуаттарҙа хәҙерге Өфө урынында шулай уҡ административ үҙәк ролен үтәгән ҡала булған, быға археология, яҙма сығанаҡтар һәм картография материалдары дәлил. Шуға күрә ҡалаға нигеҙ һалыныуҙың рәсми датаһы - 1574 йыл - элекке ваҡыттарҙан әлеге көнгә тиклем бәхәсле мәсьәлә булып ҡала һәм һәр төрлө шикләнеүҙәргә, уй-фекерҙәргә ерлек бирә. Беҙ ҙә ошо ҡыҙыҡлы тема буйынса барлыҡҡа килгән һорауҙарға үҙебеҙҙең эксперттарыбыҙ - Петр Рычков, Петр Пекрский, Николай Гурвич, Булат Аҙнабаев, Рәмил Рәхимов, Фларит Сөнгәтов, Илшат Бахшиев, Владимир Агте, Светлана Воробьева, Александр Колонских, Искәндәр Сәйетбатталовтар менән бергәләп яуаптар эҙләп ҡарайыҡ".**

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



Физик география күҙлегенән ҡарағанда, Өфөнөң уникаль урынды биләүе хаҡындағы фекер бәхәс тыуҙырмай. Ҡаланың төп өлөшө өс яҡтан һыу артериялары менән сикләнгән ярымутрауҙа урынлашҡан. Шул уҡ ваҡытта ҡала тау-ҡалҡыулыҡтарҙа тора, йылға буйҙарындағы текә ярлауҙарҙың бейеклеге урыны менән 100 метрҙан да ашып китә.

Көньяҡтан һәм көнбайыштан Ағиҙел (русса - Белая), көнсығыштан Өфө йылғалары (русса - Уфа йә иһә Уфимка) Өфөнө уратып аға, һуңғыһын башҡорттар Ҡариҙел тип атай. Шулай итеп, ҡалаға ҡоро ерҙән төньяҡтан, боронғо Себер трактынан ғына инергә мөмкин була. Көньяҡ Урал "Геродоты", бында 1734 йылда Ырымбур экспедицияһы составында килгән XVIII быуат тарихсыһы Петр Рычков, ошо турала былай тип яҙып ҡалдырған: "...башкирцы реку Уфу называют Уфа-Идель, что значит Уфа река, а Белую, Ак-Идель, что значит Белая река".

Волганың төркисә атамаһының Иҙел, Эдил, Атил рәүешендә әйтелеп йөрөтөлөүе бер кемгә лә сер түгел. Бынан Ағиҙел йылғаһының бында төҙөлөп күсеп килеүсе рустар тарафынан ни өсөн Белая Воложка тип аталыуы беленеп тора: был - башҡорт гидронимы Ағиҙелдең туранан-тура тәржемәһе, йәғни калькаһы. "Иҙел" терминының килеп сығышы асыҡланмаған, әммә хәҙерге башҡорт телендә теләһә ниндәй ҙур йылға ошо һүҙ менән атала. Шуға күрә Башҡортостанда бер юлы өс Иҙел, йәғни Волга бар: Аҡ Иҙел - "Белая Воложка"; Ҡара Иҙел - "Черная Воложка" һәм, ниһайәт, Дим - боронғоса Күк Иҙел, йәғни "Небесная" йә иһә "Синяя Воложка". Өс "Воложка"ның, йәғни Иҙелдәрҙең барыһы ла - Аҡ, Ҡара, Күк Иҙелдәр Башҡортостандың тарихи үҙәгендә - Өфөлә бер-береһенә ҡушыла. Бында күп быуаттар һәм хатта меңәр йылдар дауамында кешеләрҙе үҙенә тартып, ылыҡтырып торған ерҙең магияһы нимәлә һуң?

***Владимир Агте, тыуған яҡты өйрәнеүсе (Өфө ҡалаһы):*** Бында үтә боронғо замандарҙан бирле кешеләрҙең ҙур тораҡтары булғандыр, тип уйлайым, сөнки Өфө ярымутрауы, тәбиғи йәшәү мөхите булараҡ, бик тә уңайлы урын. "Боронғо ҡәбиләләр ни өсөн тап ошонда ҡала төҙөгән?" - тигән һорауға мин былай тип яуап бирер инем: "Ошо географик нөктә - Көньяҡ Уралдың барса юлдарына, шулай уҡ йылғаларына сығыу өсөн үҙенсәлекле аҫҡыс булып тора. Бигерәк тә йылғалар буйлап бик алыҫ ерҙәргә тиклем барып етеп була".

XX быуат баштарында төшөрөлгән фотоларҙан билдәле булыуынса, хәҙерге Дуҫлыҡ Монументына ҡаршы Ағиҙел йылғаһы буйында гигант баркалар туҡталған. Өфөгә Златоустан, Белореттан, Тирләндән металл һәм унан эшләнгән әйберҙәр ташылған. Мәсәлән, Дыуандан йылғалар буйлап ҙур баржаларҙа етен килтерелгән, ошо сеймалдан ныҡлы арҡандар ишелгән, етен орлоғонан май һығылған. Йылға юлдарының бик әүҙем файҙаланылғанына шик юҡ. Тимәк, ошондай мөмкинлектәрҙе бында боронғо замандарҙа йәшәүсе кешеләр ҙә үҙ мәнфәғәттәрендә ҡуллана алған, тип фекер йөрөтөргә ерлек бар.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Археология мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Өфө ярымутрауында һәм уның тирә-яғында таш быуатынан бирле кешеләр йәшәгән. Әгәр ҙә ки тәүтормош кешеһе, Урал тауҙарына үтеп инеп, Шүлгәнташ мәмерйәһен үҙенең картиналар галереяһына әүерелдерә алған икән, Ағиҙел ағымының түбәндәрәк өлөшөндә урынлашҡан Өфөнөң тирә-яғын төйәк итеү уның өсөн әллә ни ауыр ғәмәл булмағандыр, тип фараз итергә була.

***Илшат Бахшиев, тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Фәндәр Академияһы ӨФҮ-нең Р.Ғ. Кузеев ис. Этнологик тикшеренеүҙәр институты директоры вазифаһын башҡарыусы:*** Өфө ҡалаһының Затон биҫтәһендә ҡаҙып асылған "Затон тораға" ҡомартҡыһында бик ҡыҙыҡлы археологик артефакттар табылған. Тикшеренеүсе коллегаларыбыҙ уларҙы мезолит эпохаһына (б.э. тиклем 10-сы - 8-се мең йыллыҡтарҙан 5-се мең йыллыҡтарға тиклем. - **Тәрж. иҫк.**) тап килеүен билдәләй. Таштан яһалған предметтар йыйынтығы археология дәреслектәрендәге һүрәттәрҙе хәтерләтә. Мәсәлән, саҡматаштан юнып эшләнгән уҡ башаҡтары, башҡа таш артефакттар бик яҡшы һаҡланған.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Иртә металл эпохаһында Көньяҡ Уралда металлургия бик тиҙ үҫешә бара - баҡыр, көмөш, алтын табыла, бронза иретелә.

***Илшат Бахшиев:*** XIX быуат аҙағында донъя күргән мәғлүмәттәргә ярашлы, бронза быуатына ҡараған иң сағыу артефакттар, уларҙы ҡомартҡы тип атап була - бронза ураҡтар - Миловка ауылы янында урынлашҡан кешеләр тарафынан табыла.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Иртә тимер быуаты осоронда (б.э. тиклем IV быуат - б.э. III быуаты) Өфө территорияһы Ҡара Абыҙ тип аталған археологик мәҙәниәткә ҡараған, был атама хәҙерге Благовещен районындағы Ҡара Абыҙ ҡомартҡыһы исеменән алынған.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Ҡармаҡлы ҡорамалдарҙан башҡорттар ғәҙәти ҡармаҡ, йылтырма йәки сыртанлыҡ, шулай уҡ йылға киңлегенә тартып ҡуйылған, бер нисә урында ҡармаҡ урынлаштырылған ҡулайлама файҙаланған. Ҡармаҡ менән һәр урында балыҡ тотҡандар. Ҡармаҡ һабы оҙон да, ҡыҫҡа ла булған (40 сантиметр). Был инде балыҡты кәмәлә йөрөп йәки ҡышын мәке уйып тотоуға яраҡлаштырылған. Ауырлыҡ өсөн ҡурғаш ҡуйылған. Ҡармаҡтарҙы нигеҙҙә һатып алғандар, әммә уларҙы кешеләр үҙҙәре лә эшләгән.

Урал аръяғы күлдәрендә башҡорттар ҡышын мәкеләрҙә балыҡты ҡармаҡ менән мормошҡа тотҡан. Шулай уҡ шундай ысул да ҡулланылған. Таяҡ осона ҡалабаш усламы бәйләп, уға ныҡ итеп он һипкәндәр һәм мәкегә тыҡҡандар. Онға мормоштар (ҡыҫала төрө) күпләп йыйылған һәм йәбешкән. Тотолған ҡыҫалаларҙы ҡалтаға (бөтөн ағастан яһалған, шыуҙырмалы ҡапҡасы булған ағас йәшник) йыйғандар. Мормоштар туңмаһын өсөн йәшниктә ҡуйында тотҡандар. Шундай емле ҡармаҡ һыу эсендә булған ваҡытта балыҡсы бер нисә ҡыҫаланы ауыҙ эсендә тотҡан. Балыҡ ҡапҡас, ул тиҙ генә ҡармаҡты ауыҙындағы ҡыҫала менән емләгән.

Йылтырма менән башҡорттар бик һирәк ҡулланған һәм суртан йәки ҙур алабуғаларҙы тотҡан. Ем урынына, ғәҙәттә, ваҡ алабуғаларҙы ҡуйғандар.

Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ысулдарына төрлө тәбиғәт шарттары, шулай уҡ мәҙәниәте төрлө булған ҡәбиләләр һәм халыҡтар менән аралашыу ҙа үҙ эҙен һалған. Башҡорттарҙа һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ҡоралдары артыҡ үҙенсәлекле булмаған. Бәлки, тикшереү ваҡытынаса барлыҡ үҙенсәлектәр юғалтылып бөтөлгәндер.

Беҙгә билдәле һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ҡоралдарын өс төркөмгә бүлергә мөмкин. Беренсе төркөмгә Башҡортостандың төньяҡ һәм урманлы өлөшөндә ҡулланылған һунарсылыҡ ҡоралдары (ҡапҡан, атма, һауыт, тәпе, уҡ-һаҙаҡ һәм ҡоштарҙы ауға өләктереү) ҡарай. Был ысул борондан рустарға, Волга-Кама буйы халыҡтарына (татарҙарға, сыуашҡа, мариҙарға, коми-пермяктарға), шулай уҡ Обь йылғаһының урта өлөшөндә йәшәүселәргә (мансиҙарға һәм ханттарға) хас булған.

Икенсе, ялан төркөмөнә башҡорттарға ғына түгел, Азияның күсмә халҡы-көтөүселәргә хас ысулдар инә: йәнлектәрҙе эттәр йәки уларҙыҡы ғына, ауҙы ҡоштар, нигеҙҙә, ыласындар менән һыбай килеш эҙәрләкләү. Быңдай ысул Башҡортостандың ялан зонаһында киң таралған була.

Өсөнсө төркөм башҡорттар араһында бөтөн ерҙә лә киң тарала. Быға йәнлектәрҙе һәм ҡоштарҙы элмәк, тоҡан менән тотоу инә. Йәнлектәрҙе - ҡапҡандар, ҡоштарҙы ҡараҫҡыға тотоу, ауға өләктереү инә.

Балыҡ тотоу ҡоралдары Волга-Кама буйы бассейны халҡына хас ҡорамалдар менән бәйле. Уларҙың күпселеге рус халҡы араһында ла, рус булмаған халыҡтарҙа ла ҡулланыла. Бары тик бер нисә ысул ғына саф башҡорттарҙыҡы була: нәрәтә ҡороу, һалдау менән һуғып алыу.

Балыҡсылыҡ, бигерәк тә һунарсылыҡ, борон башҡорттарҙың хужалығында, хатта улар Рус дәүләтенә ҡушылғанда һуң да, XVIII быуат аҙағына тиклем ҙур роль уйнаған. Һуңынан, рустар менән тығыҙ бәйләнештә булыу һәм ер эшкәртеү мәҙәниәте килеп инеүе, кәсепселек йәнлектәрен юҡ итеү менән бер рәттән, уларҙың әһәмиәтен кәметеп, хужалыҡтың тағы ла етештереүсәнлеге юғарыраҡ булған төрҙәре - малсылыҡ һәм ер эшкәртеүгә урын бирә.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Диалог ҡороуҙың төп асылы - әңгәмәсене бүлдермәйенсә тыңлау. Мин һәр саҡ: "Әгәр был тыңлаусы минең туғаным, күршем йәки яҡын дуҫым булһа, мин уның менән нисек һөйләшер инем?" - тип уйлайым.***

# ТАП РАДИОЛАҒЫ

## Һүҙгә ихтирам

**Өфө һөйләй! Радио эфирынан яңғыраған бына ошо ике һүҙ беҙгә бала саҡтан таныш. Тылсымға эйә һүҙ радиотыңлаусыға күтәренкелек бүләк итә, уны яҡшы кәйефкә көйләй. Нисәмә тиҫтә быуын уны тыңлап үҫте. Һәм әле лә заманыбыҙға сәләм булып яңғырай ошо һүҙҙәр. Быуындар алмашына, ләкин радио тыңлаусы менән яҡты, ихлас аралашыу өҙөлмәй. Киреһенсә, ул байый, тулылана, яңы йөкмәтке менән сағыулана ғына бара. "Юлдаш" радиоһының юбилейы алдынан башлыса тура эфирҙа эшләүсе талантлы журналистар Гүзәл ЗАРИПОВА менән Гөлназ ХӘЛИТОВА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Төшкә сәғәткә тәғәйенләнгән "Өфө һөйләй" тапшырыуының төп йүнәлештәрен асыҡлап китәйек. Улар ниндәйһе менән тыңлаусы иғтибарын үҙенә йәләп итергә тейеш?**

**Гүзәл.** Тыңлаусының күңел талабына яуап биргән темаларҙы яҡтыртырға тырышабыҙ инде. Бер тамырлы булыуыбыҙға инандырған, барыһына ла таныш милли ҡиммәттәр, тарих, ғаилә темаларын асыусы тапшырыуҙа көнүҙәк темаларҙы ла ситтә ҡалдырмайбыҙ. Темаларыбыҙ араһында төрлөһө бар - рухыбыҙҙы нығытыусылары ла, йәмғәтселекте күптән борсоғандары, тормошсандары ла. Көндәлек актуаль темаларға ла иғтибар итәбеҙ. Тормош, йәшәйеш, йәмғиәт, тәрбиә, әхлаҡ, кеше яҙмыштары, тәбиғәт, һаулыҡ, социаль мәсьәләләр, дин, фәлсәфә, ғаилә, мәҙәниәт-сәнғәт, эшҡыуарлыҡ, сәләмәтлек, йорт-ихата-ҡаралты һәм башҡаһына ла урын бар бында.

**Гөлназ.** Халыҡ менән тере, ихлас аралашып, тыңлаусыға иң кәрәкле, яҡын темаларҙы еткерергә тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Һәр шаршамбы Башҡортостандың данлыҡлы шәхестәре, театр, музыка, әҙәбиәт вәкилдәре менән осрашыуҙар ойошторола. Халыҡты борсоған көндәлек һорауҙар, социаль темалар, ауыл һәм ҡала тормошо, йәштәр мәсьәләләре - бөтәһе лә "Өфө һөйләй"ҙә лайыҡлы урын таба. Иң мөһиме - тапшырыу тура эфирҙа бара, тимәк, ул тыңлаусы менән йәнле бәйләнешкә ҡоролған. Радиотыңлаусылар, шылтыратып, үҙ фекерен әйтә, бәхәстә ҡатнаша, уй-фекерҙәрен, борсолоуҙарын да, ҡыуаныстарын да беҙҙең менән уртаҡлаша.

**Гүзәл.** Темалар буйынса радиоһөйләшеүҙәргә береһенән-береһе шәп ҡунаҡтар, үҙ өлкәһенең оҫталары, белгестәр саҡырыла. Мәғлүмәт биреүҙән тыш, тыңлаусыларҙың көндәлек тормошон йәмләү, йәнле аралашыу аша йәшәйештәрен тойоу маҡсатын да алдыбыҙға ҡуябыҙ. Сәнғәт эшмәкәрҙәре, әҙиптәр менән осрашыуҙар айырыуса йәнле, ҡыҙыҡлы үтә. Исемдәре Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙә, донъя кимәлендә билдәле артистар менән төшкө ҡорҙағы әңгәмәләрҙең рейтингы ҙур. Эстрада легендалары, Башҡортостандың халыҡ артистары Нәзифә Ҡадирова, Иҙрис Ғәзиев менән аралашыу булһынмы, Элвин Грей псевдонимы менән билдәле Радик Юлъяҡшин, йәки донъя чарттарына арғымаҡтай елеп күтәрелгән "Әй Йола" төркөмө солисы Ринат Рамаҙановмы - барыһы ла "Юлдаш" тыңлаусыһын берҙәй ҡыҙыҡһындыра, сөнки "Өфө һөйләй" тапшырыуы һәр кемгә яратҡан, хөрмәт иткән шәхесенә тура эфирҙа һорау биреү мөмкинлеген бирә, хәтерҙә оҙаҡ һаҡланырлыҡ аралашыу мәлдәре бүләк итә. Күңелдәрҙә яҡты һағыш менән уйылып ҡалған осрашыуҙар ҙа бар. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, халыҡсан моңо менән меңләгән тамашасыны әсир иткән йырсы Бибисара Азаматоваларҙың иң һуңғы интервьюлары тап "Юлдаш" радиоһына, төшкө эфирҙа булған...

Етеҙ тормош ағышында көндәлек аралашыуға, ихлас һөйләшеүгә урын аҙ ҡалып барғанда, һәр кем үҙ донъяһына һәм эшенә сумған заманда "Өфө һөйләй" көндөҙгө сәғәт 1-ҙән 2-гә тиклемге арауыҡ - берләшеп, фекер алышып, бер-беребеҙҙең тын алышын тойоп, аралашып ҡала торған мәл ул. Проект тыңлаусыларҙың иғтибарын тәү сиратта ана шул йәнле аралашыу һәм күтәрелгән темаларҙың актуаллеге, күптәрҙең күңел түрендә һаҡланған ҡәҙерле иҫтәлектәр менән уртаҡлашыу мөмкинлеген биреүе менән дә йәлеп итәләр тип уйлайым.

Тағы ла бер мөһим нәмә - беҙ тыңлай беләбеҙ, ҡайһы берҙә кешегә, айырыуса оло йәштәгеләргә, ана шул ябай тыңлау ҙа етмәй бит ул. Шуға ла беҙгә яҡын дуҫҡа һөйләгән кеүек эс серҙәрен дә асалар, ихлас күңелдән шатлыҡтары менән дә уртаҡлашалар, борсолоуҙары хаҡында ла асыҡтан-асыҡ һөйләйҙәр. "Өфө һөйләй" тапшырыуын йәндәштәрҙең, рухташтарҙың осрашыу урыны, тип тә билдәләргә мөмкин.

**Тура эфирҙа эшләйһегеҙ, тимәк, тура диалог ҡора белергә өйрәнергә кәрәк бит инде, нисегерәк үҙләштерҙегеҙ был оҫталыҡты?**

**Гөлназ.** Ысынлап та, тура эфир - ул үҙе бер һынау. Алдан әҙерләнгән сценарий бар, әммә, тыңлаусыларыбыҙҙың шылтыратыуы тура эфирҙағы әңгәмәне бөтөнләй икенсе яҡҡа бороп ебәреүе лә ихтимал. Башта мин дә ҡурҡтым, әйтә торған һүҙҙәр онотола ине. Иң мөһиме, ваҡыт, тәжрибә халыҡ менән ихлас аралашырға өйрәтә икән.

Диалог ҡороуҙың төп асылы - тыңлау. Әңгәмәсене бүлдермәйенсә, уның фекерен аҙағынаса тыңлай белеү мөһим. Мин һәр саҡ: "Әгәр был тыңлаусы минең туғаным, күршем йәки яҡын дуҫым булһа, мин уның менән нисек һөйләшер инем?" - тип уйлайым. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, һүҙ ҙә, интонация ла үҙенән-үҙе табыла.

Тағы бер мөһим ҡағиҙә - ихласлыҡ. Тыңлаусы яһалмалыҡты бик тиҙ һиҙә. Әгәр ҙә кешене ихласлап тыңлайһың икән, ул да асылып һөйләшә башлай. Эфирҙа импровизация ла кәрәк. Берәүҙең яуабы көтөлмәгәнсә ҡыҫҡа булыуы мөмкин, икенсеһенеке, киреһенсә, оҙаҡҡараҡ һуҙыла. Шул саҡ алып барыусының оҫталығы талап ителә лә инде. Тура диалог - ул сценарийға ғына түгел, ә тере аралашыуға, ихласлыҡҡа һәм ваҡытында тапҡыр һүҙ таба белеүгә лә нигеҙләнә.

**Гүзәл.** "Һүҙ турғай түгел, сығып осһа - шунда уҡ тотоп алырҙар". Рус телендәге билдәле мәҡәлде үҙгәртеп, беҙҙә шулай тиҙәр. Ауыҙҙан сыҡҡан һәр һүҙ өсөн яуаплылыҡ тойғоһо көслө булырға тейеш, тигәнгә ишара был. Тимәк, тура эфирға әҙерлекһеҙ сығырға хаҡың юҡ. "Ой, ҡайһылай рәхәт, ярты сәғәт кенә һөйләйһең дә, эшең бөтә", - ти беҙҙең эш нескәлектәрен белмәгән ҡайһы берәүҙәр. Ә бит шул ваҡытты йөкмәткеле, тыңлаулы итеү өсөн алып барыусыға әллә күпме әҙерләнергә, эҙләнергә, үҙеңә таныш түгел теманы өйрәнергә тура килеүен күптәр уйлап та бирмәй.

Эфирҙа үҙеңде ышаныслы тотоу өсөн белемле булыу ғына етмәй, телде лә камил белергә кәрәк. "Ыҡ-мыҡ" килеп ултырған алып барыусыны бер кемдең дә тыңлағыһы килмәҫ. Бында туҡтауһыҙ уҡыу ярҙам итә. Тел байлығын арттырыу өсөн китап уҡырға кәрәк, тиҙәр. Тик китап уҡып ҡына шунда уҡ матур һөйләшә башламайһың шул. Алып барыусы осрағында оҡшаған һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәре яҙып алырға, ә иң мөһиме, уларҙы сценарий яҙғанда кәрәкле урында ҡулланырға өйрәнергә кәрәк. Шәхсән үҙем ошо ҡағиҙәгә таянам, оҡшаған фекер, һүҙҙәрҙе әле лә яҙып барырға, ҡулланырға тырышам.

Тыңлаусы телефонын алып, студияға шылтыратһын, йәки эфир каналына яҙһын өсөн уның эске күңеленә үтеп инергә кәрәк. Бында тормош тәжрибәһе, кешеләрҙе күҙәтә белеүем һәм, ғөмүмән, кешеләрҙе яратыуым ярҙам итәлер. Миңә һәр бер кеше ҡыҙыҡ, кешеләр менән аралашырға, танышырға яратам. Ә инде ул үҙ эшенең оҫтаһы, йә иһә ҡыҙыҡлы яҙмышлы икән - хайран ҡалам да ҡуям. Микрофонды алдап булмай, эфирҙа тик ихласлыҡ менән генә алдырып була. Ошо ихласлыҡҡа тартылабыҙ тип әйтеүселәр эшкә дәрт бирә.

**Гөлназ.** Үҙеңә оҡшаған, оҡшамаған эфирҙар ҙа була. Һәр эфирҙан һуң, уйланып, анализ эшләргә яратам. Тапшырыуҙың яҙмаһын ебәреүҙе һораһалар, был эфир тыңлаусы күңеленә үтеп инерлек булған, тип һығымта яһайһың. Тормошсан темалар алһаң, тыңлаусыларыбыҙ күп шылтырата. Эфирҙар кеүек, иҫтә ҡалырлыҡ юлдаштарыбыҙ ҙа бар. Бер шулай "Мөхәббәт тарихы" тигән тема алғайным, матур-матур тарихтар һөйләнеләр. Шул тапшырыуҙа ирен ғүмер буйы ғәфү итеп, кисереп йәшәгән апайҙың тарихы иҫтә ҡалды.

**Кемдәр һеҙгә күберәк шылтырата?**

**Гөлназ.** Эфирға йыш шылтыратыусылар, әлбиттә, ололар. Улар өсөн радио - ғүмер буйы юлдаш булған мәғлүмәт сығанағы, өйҙәге дуҫ һымаҡ. Һуңғы йылдарҙа йәштәр ҙә әүҙемләште. Улар социаль селтәрҙә хәбәр яҙырға күнеккән. Йәштәргә заманса темалар оҡшай. Әлбиттә, тыңлаусылар араһында бар донъяны әрләгәндәр ҙә була. Ундай шылтыратыусыларҙы бүлдермәй тыңлап бөтөрөргә тырышабыҙ. Кеше күңелдәгеһен бушатҡас, йомшара, шунан әңгәмәне ыңғай яҡҡа бороп ебәрергә мөмкин. Һәр хәлдә, беҙҙең маҡсат - негативты ҡабатлап көсәйтеү түгел, ә уны йомшартыу, тыңлаусы күңелендә яҡтылыҡ ҡалдырыу.

**Гүзәл.** "Юлдаш" тыңлаусыларының йәш даирәһе лә, социаль ҡатлам да бик киң, тип әйтер инем. Беҙҙең тапшырыуҙарҙы кескәй балалар ҙа, уҡыусылар ҙа, студенттар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә, олатай-өләсәләре лә үҙ итә. Элегерәк бәйләнешкә күберәк ауыл кешеләре, башлыса ҡатын-ҡыҙҙар сыға ине. Ә бына һуңғы йылдарҙа эфирҙа ир-егеттәр әүҙемлек күрһәтә. Тапшы-



***Тағы бер мөһим ҡағиҙә - ихласлыҡ. Тыңлаусы яһалмалыҡты бик тиҙ һиҙә. Әгәр ҙә кешене ихласлап тыңлайһың икән, ул да асылып һөйләшә башлай. Эфирҙа импровизация ла кәрәк. Берәүҙең яуабы көтөлмәгәнсә ҡыҫҡа булыуы мөмкин, икенсеһенеке, киреһенсә, оҙаҡҡараҡ һуҙыла. Шул саҡ алып барыусының оҫталығы талап ителә лә инде. Тура диалог - ул сценарийға ғына түгел, ә тере аралашыуға, ихласлыҡҡа һәм ваҡытында тапҡыр һүҙ таба белеүгә лә нигеҙләнә.***

*✓ Алдағы быуын радиосылары - беҙҙең өсөн ҙур мәктәп. Уларҙың һәр береһе үҙенә генә хас тауышы, һөйләү манераһы менән хәтерҙә ҡалған. Мәҫәлән, остазыбыҙ Әхәт ағай Мортазиндың бәрхәт тауышын бала саҡтан тыңлап үҫтек.*

# ОСТАЗДАРЫБЫҘҘАН...

## һаҡларға өйрәндек

рыуҙар бар ҡатламдарҙы ла күҙ уңында тотоп әҙерләнгәс, йәштәр ҙә уларға битараф ҡалмай.

Беҙгә тәү сиратта битараф булмаған, уйлы, ғәмле тыңлаусы шылтырата. Сибайҙан мәғариф ветераны Вәсилә апай кеүек тыңлаусылар менән аралашыу оҡшай. Осондормай ғына әйтә белгән, эфирыңдың уңышлы мәлдәрен генә түгел, хаталарын да билдәләгән, кәңәш биргән, ҡыҙыҡлы темалар менән ярҙам иткән хөрмәтле тыңлаусыларҙың береһе ул. Ҡайһы берҙә: "Гүзәл, эфирға шылтыратырға ҡыймайыраҡ торалар, ахыры, ҡана, һөйләшеүҙе башлап ебәрәйек", - тигән мәлдәре өсөн дә, студияға саҡырылған ҡунаҡтарға үҙенсәлекле һорауҙар биргәне өсөн дә рәхмәтлемен.

**Эфирға гел уйнап-көлөп кенә шылтыратмайҙар, әлбиттә. Төрлө хәлдәр булалыр. Ә бына негативты нисек көйләйһегеҙ?**

**Гүзәл.** Был һорауға аныҡ ҡына яуабым да, теүәл генә "рецебым" да булмаҫ, ахыры. Һәр осраҡ индивидуаль. Бер генә миҫал: беҙ әленән-әле Атайсалға изге эштәр темаһына әңгәмәләр ойошторобыҙ. Беҙгә шытыратыусылар күмәк көс менән төҙөкләндерелегән шишмәләр, яңы һалынған күперҙәр, күмәк көс менән төҙөлгән мәсеттәр, балалар, спорт майҙансыҡтары һәм башҡалар тураһында һөйләй. Бындай миҫалдар күптәрҙе дәртләндерә, үҙҙәре йәшәгән ерҙе тағы ла күркәмерәк итеүгә ынтылыш бирә.

Тик берәй ерҙә зыярат кәртәләнеүе, йәки Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары иҫтәлегенә обелиск асылыуы тураһындағы яңылыҡтарҙы ишетеп: "Ә беҙҙә глава насар, шуға берәү ҙә был эшкә сыҡмай ул", - тип барыһын да һүгеп шылтыратыусы ла табыла. Шундай саҡта тыңлаусының үҙенә: "Һәр бер эште башлаусы, ойоштороусы кәрәк. Бәлки, һеҙ алдан төшһәгеҙ, яҡташтарығыҙ ҙа һеҙҙе ҡеүәтләр ине",- тип сәмдәренә лә тейеп алырға тура килә.

Быйыл бер ағай шылтыратты: "Туғаным, һеҙ мине былтыр эфирҙа ныҡ ҡына оялттығыҙ, үпкә тотмайым, киреһенсә, рәхмәт әйтергә шылтыратам. Шул тапшырыуҙан һуң сәмем уянды бит, ауылда "Ир-егеттәр ҡоро" булдырып, иң башта зыяратыбыҙҙа өмә үткәрҙек. Быйыл уны кәртәләргә йыйынабыҙ. Халыҡтан был эшкә аҡса йыябыҙ, ауылдан ситтә йәшәгәндәр ҙә әүҙем ҡушылды. Тағы ла ауыл эргәһендәге шишмәне кәртәләнек, пландарыбыҙ күп",- тине. Негативты ыңғай, яҡшы яҡҡа көйләүҙең бер миҫалы ошо үҙе түгелме?

**Радиола үҙегеҙгә тиклем эшләгән ҡайһы журналистарҙы йылы тойғолар менән иҫкә алаһығыҙ?**

**Гүзәл.** "Юлдаш" радиоһы эфирында төшкө программалар йолаһы күптән килә. Уны тормошто бөтә тулылығында тойған, ҙур тәжрибәгә эйә алып барыусы Нурия Абдуллина башлап ебәрҙе. 2005 йылда уның авторлығында "Ҡунағөй" тип аталған интерактив тапшырыу эфир киңлектәренә сыҡты һәм тәүге көндәрҙән үк үҙ тыңлаусыһын тапты. Меңләгән рәхмәтле тыңлаусыһы уны кешене нескә тойоусы, күңел дарьяһына тәрән үтеп инеүсе алып барыусы булараҡ иҫкә ала.

Нурия апай мине тура эфирға тәүге тапҡыр алып ингән кеше. 2001 йылда ҡурҡа-ҡурҡа ғына уның фатихаһы менән йәнле эфирға сыҡҡан ҡыҙ ҡасан да булһа ул башлап ебәргән төшкө эфирҙа эшләр тип башына ла килтермәгәндер, әлбиттә. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - уның тыңлаусылары әле лә төшкө эфирҙа беҙҙең менән. Мәҫәлән, Яңауылдан Галина ханым менән аралашып торабыҙ, Нурия апайҙы ла иҫә алабыҙ... "Йөрәктән сыҡҡан - йөрәккә етә" - Нурия Нәсибулла ҡыҙынан тәү сиратта шуға өйрәндем.

Ә инде радио тигән серле донъяға Фәрзәнә Аҡбулатова етәкләп алып инде, эш алымдарына, радио нескәлектәренә тап ул төшөндөрҙө. Ун туғыҙы ла тулмаған студент ҡыҙға ижади бүлек эшен бер айға ышанып тапшырып, яуаплылыҡ тигән төшөнсәгә лә ул өйрәтте. "Башҡортса улай булмай" тигән һүҙе лә иҫтән сыҡмай. Теге йәки был һөйләмде яҙһам, үҙ-үҙемә: "Ә был башҡортса булдымы әле?"- тигән һорауҙы бирәм. Эш бүлмәһендә коллегаларыбыҙ менән хатта "башҡортсаға тест" тигән төшөнсә лә уйлап таптыҡ. Яҙғандарыбыҙҙы ҡысҡырып уҡып, тикшереп алабыҙ.

**Гөлназ.** Алдағы быуын радиосылары - беҙҙең өсөн ҙур мәктәп. Уларҙың һәр береһе үҙенә генә хас тауышы, һөйләү манераһы менән хәтерҙә ҡалған. Мәҫәлән, остазыбыҙ Әхәт ағай Мортазиндың бәрхәт тауышын бала саҡтан тыңлап үҫтек. Эшкә урынлашҡас, Әхәт ағай менән бергә эшләү, уның дәрестәрен алыу бәхете тейҙе. Легендар шәхес менән таныштырған яҙмышыма рәхмәтлемен.

Нурия апай Абдуллинаның төшкө эфирҙарын әле һаман һағынып иҫкә алалар. Беҙ ҙә Нурия апай ҡуйған юғары рамканы тоторға тырышабыҙ. Етәксем Миләүшә Ғәлиеваға ла бик рәхмәтлемен. Ул оҙаҡ йылдар "Самауыр янында" тапшырыуын алып барҙы. Баш мөхәррир вазифаһына күскәс, төшкө проектты миңә ышанып тапшырҙы. Әле лә ул беҙҙең эфирҙарҙы тыңлап, урынлы кәңәштәрен бирә, ярҙам итә. Остаздарыбыҙҙан иң тәүҙә һүҙгә ихтирам һаҡларға өйрәндек. Һәр һөйләгән һүҙеңдең мәғәнәһе лә, тауыш тембры ла мөһим икәнен аңланыҡ. Радио - ул бары тауыш ҡына, ә шул тауыш аша кешенең күңеленә үтеп инеү, уның менән эмоциональ бәйләнеш булдырыу - оло оҫталыҡ талап итә.

**Бөтәбеҙ ҙә "Юлдаш" радиоһының юбилейын көтәбеҙ. Был республика өсөн - шулай уҡ оло байрам. Радиотыңлаусыларҙың ҡотлауҙарын күптән үк ала башлағанһығыҙҙыр. Ошо оло сараны үҙегеҙ ниндәй хистәр менән ҡаршылайһығыҙ?**

**Гүзәл.** Ғөмүмән, бер-беребеҙҙән өйрәнәбеҙ, яңы белем эстәү оҡшай. Бөгөн коллективтағы йәштәр менән SMM алымдарын, радионы танытыу, социаль селтәрҙә популярлаштырыу юлдарын эҙләйбеҙ - был өлкә лә ифрат ҡыҙыҡ. Заман талабы шулай - интернет киңлектәренә сыҡмай эшләү мөмкин түгел. "Юлдаш" эфирҙан тыш саралары менән дә билдәле. Радио әленән-әле төрлө социаль, мәҙәни, экологик акциялар ойоштороп тора. Мәҫәлән, беҙ "Иң әүҙем ауыл" конкурсын иғлан итеп, уның еңеүсеһе - Әбйәлил районы Күсем ауылы халҡы өсөн бүләккә "Буран ФМ" спектаклен әҙерләнек. Һуңынан БСТ телеканалы уның буйынса фильм да төшөрҙө. Рәсәй радиостанциялары араһында ошондай эшкә тәүгеләрҙән булып тороноуыбыҙ менән дә ғорурлана алабыҙ.

Конкурс республикала иғлан ителгән Атайсалға изге эштәр йылында ла ауылдар араһында дауам итте. Ул "Бәйләнештә" социаль селтәрендә бик әүҙем барҙы, унда ҡатнашыусылар ауылдарын төҙөкләндереү өсөн эшләнгән эштәр тураһында һөйләне, беҙ еңеүсе ауылдарҙы ҡотлап, концерт ҡуйып, тамашанан йыйылған аҡсаны иһә ошо ауыл биләмәләрен төҙөкләндереүгә тапшырҙыҡ.

Күптән түгел БР Милли музейында радионың 25 йыллығына арналған күргәҙмә асылды. Уға әҙерләнгәндә ошондай акцияларға, "Юлдаш"тың төрлө йүнәлештәге эшмәкәрлегенә байҡау яһағанда бик күп проекттарға ҡурҡмай тотонғанбыҙ икән, тигән һығымта яһаным. Ана шул йәнле эфирҙа һөйләп, тыңлаусылар менән аралашыуҙан, эфирҙан тыш проекттарҙа ҡатнашып, гөрләп йәшәүҙән тыш башҡаны күҙ алдына ла килтерә алмайым. Хатта ялға ла ике аҙнаға китәм дә, эшемде һағынып сығам. Йыш ҡына, "радиоактив мөхит"тә эшләйбеҙ, тип шаяртабыҙ. Ошо мөхит үҙенә тарта ла тора.

**Гөлназ.** Ратҡан эшең булыуы - бәхет, тиҙәр. Беҙҙә үҙ эшенең фанаты булғандар, уны бар күңеле менән һөйгән кешеләр эшләй. Әйтелгәнсә, эйе, коллектив менән гөр килешеп эфирҙарҙы ғына түгел, ә төрлө сараларҙы бергәләп уҙғарабыҙ, һәр эштең уртаһында ҡайнайбыҙ. Әле "Өфө-Арена"ла үтәсәк ҙур юбилей тамашаһына әҙерлек бара. Беҙ уны халыҡ-ара фестиваль тип атаныҡ. Унда Башҡортостандан, Татарстандан, Ҡаҙағстандан, Ҡытайҙан, Мәскәүҙән килгән дуҫтарыбыҙ, билдәле сәхнә йондоҙҙары сығыш яһай. Өс сәғәтлек тамашала сирек быуатлыҡ тарихҡа байҡау ҙа була. Әлбиттә тулҡынланабыҙ. Тәүге тапҡыр ҙур майҙанда - "Өфө-Арена"ла тыңлаусыларыбыҙ алдында һынау тотабыҙ. Уны лайыҡлы үтербеҙ тип ышанабыҙ.

Ратҡан тыңлаусыларыбыҙҙы 25 сентябрҙә "Өфө-Арена"ла үтәсәк концертыбыҙҙа көтәбеҙ һәм "Юлдаш" радиоһының 25 йыллығы уңайынан Милли музейҙа ойошторолған күргәҙмәгә саҡырабыҙ! Беҙ бергә!

**Һорауҙарҙы Фәрзәнә ФӘТИХОВА бирҙе.**




*"Юлдаш" радиоһының 25 йыллығына арналған күргәҙмәне асыу тантанаһында.*

*✓ Төшкө аш мәлендә бер ризыҡҡа ла үрелмәне, компотын ғына эсте. Уға хәҙер ашарға ла кәрәкмәй - ғүмерлеккә туҡ! Әсәһе үлмәгән бит, шулай булғас, ашап ултырмай инде.*






Нишләптер баштан өнәмәне ошо ике малайҙың айырылғыһыҙ дуҫ булыуын. Әллә үҙенең яңғыҙаҡ тормошоноң мәһәрөмө - иллә-мәгәр кеше араһындағы яҡынлыҡты үҙенән көләү һымаҡ ҡабул итә ул. Күрә алмай башҡалар араһындағы дуҫлыҡты, шулай уҡ ир менән ҡатын татыулығын.

- Варвара Николаевна, Мунька ҡайҙа бара ул? - Илназ был хәлдән хафаға ҡалды.

- Унда ней эшең, марш бынан! - тип баланы ҡыуҙы тәрбиәсе.

- Мин дә, әтеү, барайым, - Илназ уҫал апайҙың һүҙҙәренә был юлы ыжламаны. Ҡурҡыуын дуҫының яҙмышы өсөн борсолоуы еңде.

- Директор ҡушты, уның һүҙе - закон! Беләһегеҙ бит. Бар, уйнап тор, Байтирәков, ҡамасаулама, - тип апай кеше йомшара төштө.

Күрәһең, Илназдың ныҡышмалылығы һағайтты уны. Үҙен иплерәк тоторға ишараланы. Малай тағы берәй ғауға сығарып ҡуймағайы тип уйланымы - әйтеүе ауыр.

- Мунька, бер ҡайҙа ла барма, яраймы... Ҡайҙа алып китәләр ул һине? - Баланың бер бәләкәй моҡсайлыҡ әйберен йыйнап та бөттөләр Илназ, был ни ғиллә булды, тип аптырап торған арала.

- Хушлашығыҙ ҙа тиҙерәк, минең ваҡытым юҡ, - Варвара Николаевна тағы миһырбанлыҡ күрһәтте.

- Мунька, һине ҡайҙа алып китәләр ул? - Илназ һорауын тағы шыбырҙап ҡабатланы.

- Белмәйем, - ҡаҙна йортонан башҡаны белмәгән, ололарҙың үҙенә ҡушылған эште барыбер ослап ҡуя торған ғәҙәте булыуына күнеккән Мөнир битараф һымаҡ ине.

- Кире киләһеңме?

- Белмәйем...

Варвара Николаевна Мөнирҙе етәкләп алды ла ишеккә ыңғайланы. Илназ арттарынан эйәрҙе. Мөнир башын баҫып атлай, Илназ бер-ике аҙым арттан бара. Тышҡы ишеккә еттеләр. Мөнир башын күтәрҙе лә артына әйләнеп ҡараны. Шуны ғына көткәндәй, Илназ дуҫына ташланды.

- Варвара Николаевна, Мунькаными ҡалдырығыҙ, пажалыста, - тип ҡапыл ярһып илап ебәрҙе.

Мөнир тәрбиәсенең ҡулынан һыпырылып ысҡынды ла Илназға ташланды.

- Ах, паразиттар, ҡайһылай үҙҙәренә күрә түгелдәр! Байтирәков, марш бынан! - Малайҙарҙың елкәһенән эләктереп, береһен - бүлмә яғына, икенсеһен инде асылған тышҡы ишеккә этәрҙе.

Ярһыған Илназ сығып барған тәрбиәсе апайҙың аяғын ҡосаҡланы ла балтырына тештәрен батырҙы.

- Ай-й-й! - тип ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрҙе уныһы.

Тауышҡа башҡа тәрбиәселәр килеп еткәйне. Тамара Петровна Илназды күтәреп алды, ҡосағына ҡыҫты:

- Тыныслан, бәләкәс, Мөнир икенсе корпусҡа ғына күсә. Шулай кәрәк. Күрешерһегеҙ әле.

* * *

Эшен ослап, кире әйләнеп ҡайтҡан Варвара Николаевна аяғын тешләгән Илназды тәрбиәселәр кабинетына алып инде. Ата-әсәле балаға ҡул күтәреү, ҡолағынан бороу ниәте юҡ унда. Аллам һаҡлаһын ундай яҙыҡ аҙымға барырға. Тик нотоҡ ҡына уҡыны:

- Мостафин һине боҙоҡлоҡҡа ғына өйрәтә. Унан ары булыу хәйерле. Инде лә эш боҙһаң, әсәйеңә телефондан шылтыратам, үҙе килеп күрһен малайы ҡайһылай насар яҡҡа үҙгәргәнен.

- Минең әсәйем үлмәгәнме ни? - Көтөлмәгән һорауы менән Варвара Николаевнаны аптырауға һалды Илназ.

- Нисек инде, үлмәгәнме? Ул тағы ни тигән һүҙ? Ҡайҙан алып ундай хәбәр һөйләйһең?..

- Ысын үлмәгәнме әсәйем? - Илназ күҙ алдында үҙгәрҙе.

Мәңге уҫал, гел әрләргә генә әҙер торған Варвара Николаевна уға ер йөҙөндәге иң һөйкөмлө кеше булып күренде. Бүлмә яҡтырып китте, уның һәр мөйөшөндә, түбәлә, люстралар осонда, иҙәндә лә хатта йондоҙҙар йымылдаған кеүек күренде малайға. Ул Варвара Николаевнаның башҡа бер һүҙен дә ишетмәне - ауыҙын йырып, йылмайып тик торҙо. Тәрбиәсе апай хәбәр һөйләмәй, ә моңло итеп йырлай тиерһең!

- Байтирәков, тием! Байтирәков! - Малай саҡ аңына килде.

Ҡайҙа барһа ла, кемде күрһә лә - барыһы ла башҡаса ине Илназға: бүлмәләр - яҡтыраҡ, кешеләр - матурыраҡ, ҡояш нурҙары - сағыуыраҡ һәм йылыраҡ, һулаған һауаһы - сафыраҡ, ҡуйы һәм татлыраҡ! Төшкө аш мәлендә бер ризыҡҡа ла үрелмәне, компотын ғына эсте. Уға хәҙер ашарға ла кәрәкмәй - ғүмерлеккә туҡ! Әсәһе үлмәгән бит, шулай булғас, ашап ултырмай инде.

- Ашамайһың барыбер, кәтлитеңде алайыммы? - Өҫтәл артында йәнәш ултырған малай өндәште.

- Ал һуң - тине Илназ, йылмайып.

- Пюреһен мин алайым әтеү. Алайыммы, Илназ? - Икенсе яғынан һоранылар.

- Ал шул...

Кискеһен ҡыуанысынан ҡуҙғыған Илназ йоҡоға китә алмай аҙапланды. Нурия апай үтте рәттәр араһынан, ул дежур икән бөгөн. Малай торҙо ла серҙәш апайы янына китте.

- Нурия апай, шыршы байрамына тиклем нисә көн ҡалды икән? - тип һораны, уйсанланып.

- Тиҙерәк Ҡыш бабай бүләге алғың киләме ни?

- Юҡ та. Әсәйем, шыршы байрамына үҙем килеп алам, тигәйне. Мин беләм хәҙер: әсәйем бит үлмәгән!..

- Бәй, бәләкәс, мин һине бер ҙә генә аңламайым. Ни тураһында һөйләйһең? - Илназ үҙенең яңылыш уйлап йөрөгәне, хәҙер сабырһыҙланып әсәһен көтөүе тураһында һөйләп бирҙе.

- Шыршы байрамына тиклем нисә көн ҡалды, апай? - һорауын тағы ҡабатлап ҡуйҙы хикәйәтенең аҙағында.

- И-и-и, балаҡай, ҡайһылай бөтөрөнөп йөрөгәнһең. Һөйләргә булған уйҙарыңды миңә, улайтып һыҙып ҡайғырып йөрөгәнсе... Ҡуйсы, балаһын ошолай зарыҡтырып, сит-яттарға ҡалдырып киткән кеше йөрәкһеҙҙәр... Ике аҙна ғына ваҡыт ҡалды, балаҡай, шыршы байрамына.

- Күп буламы ул ике аҙна?

- Ун дүрт көн инде, - Нурия ханым малайҙың бармаҡтарында күрһәтте ун дүрт көндөң ни дәүмәлдә икәнен.

Илназ, урынына барып ятҡас, бармаҡтарын бер яҙып, бер ҡалған көндәрҙе үҙенсә хисаплап ятты ла, бәхетле йылмайып, йоҡлап китте.

* * *

Илназ хәҙер Мөнир менән саф һауала йөрөгәндә генә күрешә. Һөйләшеп хәбәрҙәре бөтмәй, мауығып уйнайҙар. Илназ әсәһенең иҫән-һау булыуы тураһында дуҫына ике көн буйы бәйән итте. Моңһоуланған Мөнир уны бүлдермәй тыңланы. Башҡаларҙың үлгән әсәһе лә терелә, ә уныҡы килмәй ҙә ҡуя. Ҡайҙа йөрөй, нишләп килмәй икән?

- Мунька, мин придумал: әсәйемә әйтһәм, һине үҙебеҙгә ала ул. Эйе, нишләп алмаһын, ала! Добрая бит минең әсәйем. Илгиҙәр ағайым, һин, мин, рәхәтләнеп беҙҙә йәшәрбеҙ, садикка йөрөрбөҙ, тышта уйнарбыҙ. Беҙҙә, өйөбөҙҙә, уйынсыҡтар кү-ү-үп - тау һымаҡ. Сәпит кенә юҡ. Атайым ала ул. Алам тине, - Илназ шулай уны үҙҙәренә алып ҡайтыу тураһында уйлағанын әйтте Мөниргә. Дуҫы, нишләптер, иғтибарһыҙ тыңланы уны. Урынһыҙ шаярҙы, ҡар бәрҙе Илназға. Битенә тейгеҙҙе хатта.

- Мине ысынлап та алыр микән әсәйең? - Дуҫтар икенсе көн күрешкәс, Мөнирҙең тәүге һүҙе шул булды.

- Ала, тинем дә баһа, - Илназ дуҫының үҙгәреүенә аптырай биреп яуапланы.

Мөнир, Илназдың һүҙҙәрен ҡолағы аша үткәргән һымаҡ ҡыланһа ла, ныҡ тулҡынланды. Дуҫы ғына әйтте бит, әсәһе түгел. Шуға ымһынғыһы килмәне. Ундай бәхеткә ышанманы. Бәләкәс кенә йөрәгенә донъяның уға ҡарата бәғерһеҙ булыуын әллә ҡасан һеңдергән инде. Бынан ары ла үҙе белгәнсә генә даулар кешеләр араһында урынын, юл ярыр һикәлтәле тормош яланынан. Тик, барыбер, әсәйле булғыһы килә уның. Йымылдаған бәләкәс кенә осҡон саткыһы күңеленә өмөт ойотҡоһон һалмай ҡалманы. Шуға һораны Илназдан, кисәге хәбәрҙе яңыртып. Малайҙар оҙаҡ хәбәрләште яңы тормош тураһында. Тора-бара ниәттәренең һис шикһеҙ ғәмәлгә ашырына тамам ышандылар. Төрлөсә хыялланып ҡыялдылар.

Шифаханала дауаланыу ваҡыты тамамланыуға барған мәлдә ата-әсәләр балаларын килеп ала башланы. Һирәгәйгән төркөмдәрҙе бергә ҡуштылар. Яңы йыл алдынан хеҙмәткәрҙәр шулай үҙҙәренә эште кәметте. Илназ менән Мөнир бер нисә көнгә тағы йәнәш карауатта йоҡлап йөрөнө. Илназ йоҡларға ятҡан һайын, бармаҡтарын бөгөп, шыршы байрамына ҡалған көндәрҙе хисапланы. Тағы дүрт кенә бармағы ҡалды. Инде әсәһе лә оҙаҡламаҫ. Үҙенең дә сабырлығы сигенә етте. Мөнир ҙә бер хафаланып, бер татлы өмөт менән Илназдың бөгөлгән бармаҡтарының кәмей барғанын күҙәтте.

- Мостафин, йыйын, детдомдан алырға килделәр, - тинеләр ике генә бармаҡ бөгөлмәй ҡалған көндә.

Мөнир үрһәләнеп бер Илназға ҡараны, бер бойороҡ биргән апайға баҡты. Эйе, белә-күрә тороп, юҡҡа өмөтләнде шул. Ҡасан уға бәхеттең йылмайғаны бар? Гел шулай: яҡшы нәмә ауыҙ һыуын ҡоротҡансы ымһындыра ла юҡ була ла ҡуя. Өмөттәренең емешен татырға яҙғаны юҡ әле Мөниргә. Бәхетһеҙ ул шулай.

Илназ да ҡатып ҡалды. Үҙен дуҫы алдында ғәйепле тойҙо. Уны ышандырып бөткәйне бит. Хәҙер, ана, ҡорған бөтә пландары селпәрәмә килде. Мөнирҙең тағы әсәһе булмаясаҡ. Дуҫын үҙҙәренә алып ҡайтырға уйлауы тураһында үҙенсә әйтеп ҡараған булды ололарға. Тик уға йәлләп кенә ҡаранылар ҙа бының булыуы мөмкин түгеллеген аңлаттылар.

Бөтәһе лә дөрөҫ, бөтәһе лә уйланылған, тик ғәмәлдә, нишләптер, ярамай булып сыға ла ҡуя. Ололар тормошто үҙҙәренсә шулай килбәтһеҙ итеп ҡорған, үҙҙәренә лә, балаларға ла ирәйеп йәшәргә ирек бирмәйҙәр. Уларҙың бөтә нәмәһе лә киреһенсә, кешегә ҡаршы. Килешеп торған һәм ҡарауға тейешле күренгән ябай ғына нәмәне лә, ярамай, ти ҙә ҡуялар. Ярамай - башҡа һүҙ белмәй улар!

Илназ да, Мөнир ҙә был юлы иламаны. Ысынбарлыҡты нисек бар, шулай ҡабул иттеләр. Мөнир башын эйҙе лә әйберҙәрен йыйнарға кереште, ә Илназ ситтән ҡарап торҙо.

Бына Мөнирҙе ят апай сығыу яғына алып китте.

- Тамара Петровна, мин, мин подарок... Мунькаға... Тиҙерәк, сникерсымды бирегеҙ, Мунькаға подарок, - тип Илназ үрһәләнеп тәрбиәсегә ташланды.

Балаларға туғандары алып килгән күстәнәстең бер өлөшөн тәрбиәселәр, ғәҙәттә, шкафҡа бикләй. Аҙаҡтан өлөшләп бирәләр. Илназға Динис ағаһы һуңғы тапҡыр ике "Сникерс" алып килгәйне. Береһен Мөнир менән бүлешеп ашанылар, ә икенсеһен тәрбиәсе апай, күп була бер юлы, аҙаҡтан бирәм, тип, йыйып ҡуйғайны. Тамара Петровнанан шуны һораны. Дуҫы менән бүләк биреп хушлаша алыуы ҡайғыһын йомшартты бер аҙ.

Туң тәҙрә быялаһының ҡырындағы ireү һыҙаттан ҡарап торҙо дуҫының урамға сыҡҡанын, уны автобусҡа ултыртҡандарын. Мөнир күрмәһә лә, ҡул болғаны уға Илназ.

* * *

Малайҙарҙың тормош юлы яңы һыҙатлана ғына. Алда әле күреү ҙә, зиһен менән айҡау ҙа мөмкин булмаған киләсәк ята. Йыл артынан йыл үтәсәк, ҡышты - яҙ, йәйҙе көҙ алмаштырасаҡ. Ни көтә Илназ менән Мөнирҙе ваҡыт ағышы ярҙарында, нисек ҡороп улар юғарынан бүләк ителгән берҙән-бер тормошто?

Был һорауҙарға яуап юҡ. Башланып торған ғүмер юлында малайҙар, оло бер һынауҙы лайыҡлы үтеп, юғарыраҡ баҫҡысҡа үрләне. Илназ ҡаршыһына ҡуйылған сетерекле мәсьәләләрҙе үҙ алдына хәл итеү дәресенән имтихан тотто, ә Мөнир ысын дуҫлыҡты, тоғролоҡто, миһырбанлыҡты тойоп белеп, күңеленең бер мөйөшөнә һалып ҡуйҙы. Ҡыҫҡа ғына мәлгә осрашҡас, үҙ юлдарынан артабан атлап китте малайҙар.

**(Аҙағы.**
**Башы 34-36-сы һандарҙа).**

✓ *Мәҡәләләремә баһа биреп, бәғзе бер урындарын тәнҡитләп, һирәкләп иҫкәрмәләрен әйтештерҙе Хәйҙәр ағай. Уның кәңәштәрен тотоп, үҙемдең артабанғы яҙмаларымды "туралап", "кәләмемде шымартып" барырға тырыштым.*



*БЕР ЙЫЛЫ ҺҮҘ*

**Әле оҙайлы хәрби хеҙмәтем тамамланмаған осор, сираттағы командировкаларымдың береһендә баш ҡалабыҙҙағы бер мөхәрриәткә ниндәйҙер ҡулъяҙмамды алып ингәйнем. "Ни йомош, иптәш подполковник?" тип ҡаршы алды бер ағай. "Бер хикәйә алып килгәйнем…" Минең ҡайһы яҡтан, кем булыуымды белешеп алғас, ул: "Хикәйә яҙырға яҡшы итеп өйрәнгең килһә, Хәйҙәр Тапаҡовты күберәк уҡы", - тип кәңәш итте.**

# АҒАЙ КӘРӘК...

Хәйҙәр ағайҙың әҫәрҙәрен элек тә ялға ҡайтҡан араларҙа уҡығылай торғайным. Ә отставкаға сығып, Сибай ҡалаһына йәшәргә ҡайтҡаны бирле уның китаптарын даими уҡып барам. Инде иллегә аяҡ баҫып, үҙем дә ҡулыма ҡәләм тота башлағас, Сибай Яҙыусылар ойошмаһы етәксеһе булған ифрат алсаҡ, ягымлы был ағай менән яҡыныраҡ танышып алдым. Бер килке хикәйәм гәзит-журнал биттәрендә сыҡҡылағас, бер көн миңә Хәйҙәр ағай аңғамаҫтан һорау бирҙе. "Яҙған әйберҙәрең байтаҡ ҡына йыйылып бара шикелле, китап итеп сығарырға уйламайһыңмы?" Дөрөҫөн генә әйткәндә, бындай уй минең бер ҡасан да башыма килгәне юҡ ине. Үҙ ҡолағыма үҙем ышанмаған һымаҡ, ҡабатлап һорай ҡуйҙым: "Нисек? Әллә, ысынлап та минең яҙғандарым китап итеп сығарырлыҡмы?" Хәйҙәр ағайҙың етди йөҙөн күреп, уның шаяртмауын төшөндөм... Ул саҡ компьютер-фәләндең дә яңы ғына күренгеләй башлаған осоро, ул миңә ҡайҙа, күпме һәм нисегерәк итеп әҫәрҙәрҙе баҫтырырға, башта яҙыусыларға уҡытып, уларҙан китап сығарыуға тәҡдимдәр яҙҙырып алырға кәрәклеген аңлатып бирҙе.

"Аманат" журналында, "Йәншишмә" гәзитендә баҫылып сыҡҡан хикәйәләремде бер урынға туплап, ойошмаға алып килеп тапшырҙым. Бер аҙ ваҡыттан Хәйҙәр ағай мине һәм электән яҙышҡан башҡа ҡәләмдәштәрҙе саҡыртып, буласаҡ китабым хаҡында ҡор ойоштор-ҙо. Үҙе матур итеп рецензия ла яҙып ҡуйған ине. "Китапҡа ниндәй исем бирәһең?" - тип һорағас, йәнә албырғап ҡалдым. Минең "ыҡ-мыҡ" иткәнемде күреп, тәжрибәле был әҙип: "Шундағы бер хикәйәңдең исеме менән "Сыйырсыҡ ояһы" тип ата китабыңды", - тине. Китаптың исеме ниндәйерәк булыуының мөһимлеген дә аңлатып бирҙе. Ул ғына ла түгел, баш ҡалаға барғанында ҡулъяҙманы үҙе "Китап" нәшриәтенә алып барып тапшырҙы. Оҙаҡламай, был ағайҙан "Хәлил, китабың сығып килә" тигән хәбәр алып, тағы һөйөндөм. Бынан тыш, гәзит, журналдарҙа гел генә сыҡҡылап торған мәҡәләләремә объектив баһа биреп, бәғзе бер урындарын тәнҡитләп, һирәкләп иҫкәрмәләрен әйтештерҙе Хәйҙәр ағай. Уның кәңәштәрен тотоп, үҙемдең артабанғы яҙмаларымды "туралап", "кәләмемде шымартып" барырға тырыштым.

Тағы бер нисә йылдан уның "Яҙыусылар союзына инергә уйламайһыңмы?" тигән һорауын ишеткәс, ысынлап та "ултыра төшә яҙҙым". Быгаса "яҙыусы мотлаҡ педагог, филолог - тел белгесе булырға тейеш" тигән инаныуҙа инем бит. Медик, өҫтәүенә хәрби кеше, яҙыусы була ала тигән нәмә төшөмә лә инеп сыҡмағайны. "Ә... мөмкинме?" "Әлбиттә,



мөмкин, - тине был ағай ышаныслы итеп. - Хәҙер нәшриәттә сыҡҡан китабың да бар, даими баҫмаларҙа әҫәрҙәрең сығып тора, фәлән-фәлән ҡағыҙҙарыңды рәтләп, өс яҙыусынан тәҡдим яҙҙырып алһаң, Яҙыусылар союзына алыуҙары бик мөмкин, бер рекомендацияны үҙем яҙырмын. Башҡортостан Яҙыусылар союзына ингән кеше автоматик рәүештә Рәсәй Яҙыусылар союзында ла ағза була", - тип тә өҫтәп ҡуйҙы... Бына ошондай ғәйәт кешелекле ағай кеше хаҡында ине әйтер һүҙем.

Мәшһүр шағирыбыҙ Әнғәм Атнабайҙың элек Мостай Кәримгә ҡарата яҙған бер шиғыры бар. "Ағай кәрәк" тип атала ул.

*"Мин ағайһыҙ үҫкән малай…*
*Туҡмалдым һирәк-мирәк…*
*Ә бөтөнләй туҡмалмаҫҡа*
*Мотлаҡ бер ағай кәрәк.*
*Ағай кәрәк - ат һыртына*
*Тәү ҡабат менгән саҡта,*
*Яҡты донъяны ҡарайтып*
*Ҡайғылар килгән саҡта.*
*Ағай кәрәк - ҡарурмандан*
*Аҙашмай сығыр өсөн,*
*Уттарында янмай ҡалып,*
*Һалҡынға сыҙар өсөн.*
*Ағай кәрәк - тыйнаҡ ҡына*
*Аҡыллы һүҙе менән,*
*Әле йомшаҡ, әле усал*
*Ҡарашлы күҙе менән.*
*Ағай кәрәк - ҡай сағында*
*Барлығын тойоу етә,*
*"Мин ағайлы" тигән уй ҙа*
*Кешене ҡыйыу итә. …*
*Улдарымдың улдары бар…*
*Мин инде бабай, тимәк…*
*Аҡ мыйыҡлы бабайға ла*
*Барыбер ағай кәрәк! Ағай кәрәк!"*

Бына ошо шиғырҙы уҡығас та, уның тап Хәйҙәр ағай һымаҡтарға арнап яҙылғанлығы аңлашыла. Шулай уҡ мәҙәниәтле, ягымлы, ябай, һәр саҡ иғтибарлы, кешеләргә ярҙамсыл булған Әмир Әминев, Әхмәр Үтәбай һәм башҡа күп яҙыусыларыбыҙҙы ла телгә алғы килә. Әммә, минең әҙәбиәткә килеүемдә - яҙыусы (һуңғы осор, башлыса, журналист) булып китеүемдә ҙур роль уйнаған, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, тиҫтәнән ашыу китап авторы Хәйҙәр Ниғмәт улы Тапаҡовҡа айырыуса ҙур рәхмәтлемен. Уға, уның ғаиләһенә, бала-сағаларына ныҡлы иман, һаулыҡ, артабанғы ижад уңышлыҡтары насип итһен тип Аллаһ Тәғәләнән һорайым. Һәр саҡ шулай ярҙамсыл, ябай, кешелекле булып ҡалыуын теләйем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*



# ДИҢГЕҘ ҠЫҪАЛАҺЫ ҺӘМ ҺИГЕҘАЯҠ



Күптәнмелер - юҡмылыр, ҡасан булғандыр - белмәйем, бер диңгеҙҙең төбөндә бик мәкерле, яуыз уйлы, аҫтыртын холоҡло һигеҙаяҡ (осьминог) йәшәгән, ти. Ул көтмәгәндә, кем үтеп бара, шуға һөжүм итә торған булған. Һигеҙаяҡ бик оҫта йәшеренә белгән. Диңгеҙ төбөнә төшөп, оҙаҡ ҡына хәрәкәтһеҙ ятыр булған. Бәләкәй ҡыҫала һәм ваҡ балыҡтар өйөрөн шулай һағалаған ул. Аңғармаҫтан һөжүм итеп, үҙенең ағыулы һәрмәүестәре менән саҡҡан. Үҙенә күңелһеҙ була башлаһа, был юлбаҫар хатта үҙенән эрерәк диңгеҙ балыҡтарына ла һөжүм итергә лә тартынмаған. Әгәр инде үҙенә ҡурҡыныс янаһа, тиҙ генә йәшеренергә лә өлгөрә икән.

Ҡомло диңгеҙ төбөндәге ҡаялар һәм ылымыҡтар араһында иң йыуаш һәм иң зыянһыҙ йән эйәләре - бик күп ҡыҫалалар йәшәгән. Көндәр буйы бер-береһе менән шаярышып уйнағандар. Ҡайһы саҡта уйын-көлкөләре шаулыраҡ булып китһә лә, бер кемгә лә ҡамасауламағандар. Киреһенсә, диңгеҙҙә көн күреүселәрҙе бындай изге күңелле һәм асыҡ фиғелле төркөмдән торған күршелек тик ҡыуандырған ғына.

Бер ваҡыт, ҡыҫалалар ғәмһеҙ генә уйнап йөрөгәндә, һигеҙаяҡ һиҙҙермәй генә тегеләргә яҡынлаша. Ул ҡыҫалаларҙың баҫтырышып, бер-береһен ҡыуышып уйнағанын, ҡабырғалары менән йәһәт кенә шылып йөрөгәндәрен, ҡыҫҡыстарын шалт-шолт иттереүҙәрен һәм диңгеҙ төбөндәге ҡомдо болоттай күтәреп көрәшеүҙәрен иғтибар менән ҡыҙыҡһынып күҙәтә. Шунан һигеҙаяҡ уңайлы ғына мәлде тап килтереп, ҡапыл уларға ташлана. Үҙенең һәрмәүестәре менән бер нисә ҡыҫаланы эләктереп ала ла, үҙе менән һөйрәп алып китә. Ҡотола алған ҡыҫалалар төрлөһө төрлө яҡҡа сәселеп ҡаса, ҡайһылары ҡая таштың ярыҡтарына инеп йәшеренә. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ҡурҡыныс үтеүен күреп, ҡыҫалалар ышыҡ урындарынан сығалар. Шунда улар араларында күп кенә дуҫтарының юҡлығын күрәләр. Йөрәктәрен юғалтыу һәм юҡһыныу һағышы биләп ала. Ҡабат бер кемдең дә уйнап, күңел асҡыһы килмәй. Улар бергә йыйылалар. Тәпәйҙәре менән ҡағылып, бер-береһен тынысландырырға тырышалар. Урынлашҡан тәрән тынлыҡты боҙоп, хөрмәтле ҡарт ҡыҫала һүҙ башлай:

- Халҡым минең! Бөгөн мәкерле һигеҙаяҡ дуҫтарыбыҙҙың бер нисәүһен һәләк итте. Уларҙы юғалтыу - беҙҙең өсөн ҙур ҡайғы. Ошолай итеп, һаман да ҡайҙандыр ярҙам көтөп тик ултырайыҡмы? Һигеҙаяҡтың тағы ла килмәүенә ышанысығыҙ бармы? Беҙгә бергәләп һигеҙаяҡҡа ҡаршы торорға кәрәк. Уның өсөн бик һаҡ булыу һәм күмәкләшеп эш итеү мөһим...

Ҡыҫалалар телдәре асылып, кемуҙарҙан һөйләй башлайҙар:

- Беҙгә нимә эшләргә? Ниндәй ҡот осҡос һигеҙаяҡ ул? Унан нисек итеп һаҡланырға?

Ҡарт ҡыҫала ҡыҫҡыстарын юғары күтәреп, тынлыҡ һорай:

- Мин - һеҙҙең арала иң олоһо! Үҙ ғүмеремдә күпте күрҙем. Һигеҙаяҡтан нисек һаҡланырға бер уй килде әле башыма...

Шулай итеп, ҡыҫалалар төркөмөндә йәшерен план барлыҡҡа килә. Улар даими күҙәтеп торор өсөн төрлө урынға ҡарауыл ҡуялар. Һигеҙаяҡ килеп сығыу менән ҡарауылда торған ҡыҫала ҡыҫҡыстары менән ҙур ҡабырсаҡты күтәреп, уға өрә. Ҡурҡыныс барлығын белдереп, тирә-яҡты яңғыратып, ҡаты тауыш сығара. Ҡыҫалалар алдан әҙерләгән ышыҡтарына тиҙ генә йәшенешеп бөтә. Һигеҙаяҡ табышһыҙ китеп бара.

Ҡыҫалаларҙың был хәйләһе һигеҙаяҡты сығырынан сығара, асыуын ҡабарта. Ул хатта шартлар сиккә етеп ҡабара һәм нәфрәтенән ҡып-ҡыҙыл була. Ошо мәлдә эргәһенән йөҙөп барған акулаға бар асыуы менән ташлана. Әммә үҙе саҡ акуланың ҡорбанына әйләнмәй. Уның йыртҡыс тештәренән саҡ ситкә тайпылып ҡала.

Мәрйендәр араһына йәшенгән ҡарт ҡыҫала, хайран ҡалып, һигеҙаяҡтың акулаға һөжүм иткәнен күҙәтә. Шул ерҙә яңы план барлыҡҡа килә лә инде. Әммә был план бик хәүефле була, сөнки ҡыҫаланы һигеҙаяҡ тотоп ашау ҡурҡынысы янай. Ҡарт ҡыҫала бер нәмәгә ҡарамай, үҙен дә йәлләмәй, халҡын ҡотҡарғыһы килә. Күп уйлап тормай, акуланы эҙләп китә. Ә ул диңгеҙ төбөндә ял итеп ятҡан була. Ҡыҫаланы күреп ҡалыу менән, ауыҙын ҙур асып, уны йоторға әҙерләнә.

Ҡарт ҡыҫала ҡыҫҡыстарын өҫкә күтәреп:

- Хөрмәтле акула! - тип, ҡысҡырып һөйләй башлай. - Ашыҡмағыҙ әле! Башта мине тыңлағыҙ, теләһәгеҙ, аҙаҡтан ашарһығыҙ!

Ҡарт ҡыҫала мәкерле һигеҙаяҡтың барыһын да ыҙалатҡанын һәм ялҡытҡанын һөйләй. Уға һабаҡ бирергә кәрәклеген аңлата. Үҙенең һигеҙаяҡты нисек итеп тоҙаҡҡа эләктереү планы барлығын, тик бының өсөн хөрмәтле акуланың ризалығы кәрәклеген әйтә.

Һигеҙаяҡ тураһында ишеткәс, акула ҡыҫаланы ашамаҫҡа була. Ул һигеҙаяҡҡа ныҡ асыулы була һәм уның һабағын уҡытып алыуға ҡаршы килмәй - киң йылмайып, кинжалдай үткер тештәрен шаҡылдатып, ризалығын бирә. Ҡыҫалалар һигеҙаяҡты әүрәтергә, ә акула йәшеренеп көткән еренән сығып һөжүм итергә килешәләр.

Килешеү буйынса, икенсе көндө ҡыҫалалар шаулы уйындар ҡороп, үҙҙәренең ғәҙәттәге урындарында күңел асыуҙы дауам итәләр. Улар шулай итеп һигеҙаяҡтың иғтибарын яуларға тейеш булалар. Ҡоролған план эшләй башлай һәм тиҙҙән һигеҙаяҡ та күренә. Ҡыҫалалар акула йәшеренгән тарафҡа ҡаса башлайҙар. Һигеҙаяҡ уларҙы ҡыуа төшә. Ҡапыл ғына уның алдында акула пәйҙә була. Һигеҙаяҡ тоҙаҡҡа эләккәнен аңлай. Хәҙер ҡасырға уға сират етә. Әммә акула һигеҙаяҡтан йылғырыраҡ була, ул уны ҡыуып етә лә үҙенең үткер тештәре менән эләктереп ала. Һигеҙаяҡ һәрмәүестәре менән бар көсөн йыйып ҡаршылашып маташа. Уның бер һуғыуы акуланың күҙенә тура килә һәм акула бер мәлгә генә таҫыллығын юғалта. Һигеҙаяҡҡа уның үткер тештәренән ысҡынырға мөмкинлек тыуа һәм ул бар көсөн йыйып, бәләкәй һыу аҫты мәмерйәһенә инеп йәшеренә.

Акула бик оҙаҡ эҙләй уны, ләкин таба алмай. Һигеҙаяҡ оҫта йәшеренә белә бит, шунлыҡтан ул тере ҡала. Акуланан алған тәрән яралары уға бик ҙур һабаҡ була. Башҡаларға һөжүм итмәһәм, был хәлгә төшмәҫ инем, тигән һығымтаға килә ул һәм был урындарҙы ташлап, ҡайҙалыр китә, башҡаса уны күреүсе булмай. Ҡыҫалалар тағы ла тыныс ҡына йәшәй башлайҙар. Улар ҙа уңыш һәм еңеү өсөн һәр эштә лә төплө һәм аҡыллы итеп төҙөлгән пландың мөһимлеген һәм дуҫтарының ярҙамы кәрәклеген аңлай...

Шулай тыныс ҡына йәшәп ятҡанда, ҡаялағы мәрйен рифынан мәрүәт (ынйылы) ҡабырсаҡҡа егелгән диңгеҙ атын күреп ҡалалар. Төрлө төҫтә емелдәгән ҡабырсаҡҡа түбәндәге хәҙис яҙылған була: Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә: "Кем дә кем башҡаларға зыян эшләһә, Аллаһу Тәғәлә шул уҡ зыян менән уны яҙалар. Ә кем ауырлыҡтар тыуҙырһа, Хоҙай үҙенә кәрәкле әжерен бирер".

**Энгин НИГАР.**

**Төрөксәнән Мөслимә АСҠАРОВА тәржемә итте.**

✓ *Алтмыш ике йыл үтеп китте ул ваҡиғаларҙан һуң. Әммә Һаҡмар йылғаһына һыйынып ятҡан Муллаҡай, Ҡолсора, Түбәнге Иҙрес һәм Үрге Иҙрес ауылдарында әле лә башҡорт теленә ихтирам оҫҡон-оҫҡон булып сәсрәп китә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОД ЕТЕШМӘҺӘ...

## тиҙ арыйһығыҙ

■ Организмға йод етешмәү арыуҙың сәбәбе була ала. Ғәҙәттә, яҙ һәм йәй миҙгелдәрендә энергия дефициты булырға тейеш түгел һымаҡ, шулай ҙа бындай күңелһеҙлек килеп тыуған икән, туҡланыу режимына иғтибар итегеҙ, ти белгестәр. Әгәр ҙә тиҙ арыйһығыҙ, һалҡын тейеп бара, сәстәрегеҙ ҡойола, тирегеҙ кибә икән, етмәһә, хәтер насараййып, ишетеү һәләте түбәнәйһә, йөрәк тибеше боҙолһа, организмға йод етешмәүе ихтимал. Йод диңгеҙ кәбеҫтәһендә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтарында күп. Йодлы тоҙҙы ла ҡулланырға була, әммә тоҙҙо оҙаҡ һаҡлаһаң, йодтың күпселек өлөшө юҡҡа сыға, сөнки йод - осоусан берләшмә.

■ Кеше нимә ашай, шул уның тиреһендә асыҡ сағыла, тиҙәр. Ниндәйҙер микроэлемент етмәһә, матдәләр алышыныу процесы шунда уҡ боҙола башлай. Шулай итеп, тирене йәш һаҡлау өсөн ниндәй витаминдар кәрәк һуң? С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, күҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәсәлән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙә күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар әҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йомортҡала, үҫемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар. А витамины етешмәһә, тире кибә башлай. Тырнаҡтарҙың, сәстәрҙең сәләмәтлеге лә А витамины менән бәйле. А витамины сығанаҡтары - аҡ май, ҡабаҡ, эремсек, һыйыр бауыры.

■ Зирәклек күрһәткән кеше башҡаларҙың күҙе алдында бик уңышлы кеше булып күренә, ти Квинсленд университеты ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар араһында эрудицияны тикшереүсе һорауҙарға тиҙ яуап биреүселәрҙе шулай баһалағандар. Һөҙөмтәләр аҡыл ҡеүәһенә, кешенең шәхси сифаттарына бөтөнләй бәйле булмай сыҡҡан. Ғалим Уильям фон Гиппель билдәләүенсә, социаль интеллект - ул белгәнен практикала ҡуллана алған кеше. Бындай кешеләр йыш ҡына лидер булып тора һәм уларҙы тап зирәклеге берләштерә лә инде.

■ Табиптар шәкәрҙе зарарлы тип иҫәпләй. Әммә Америка ғалимдары уның да файҙалы яғын асыҡлаған. Күптән билдәләнеүенсә, сабыйҙарға татлы һыу бирһәң, улар ауыртыуҙы яҡшыраҡ кисерә. Ғалимдар раҫлауынса, 5-10 йәшлек балаларға ла шәкәр ауыртыуҙы баҫыусы булараҡ тәьҫир итә. Был тәьҫир эндорфиндар менән бәйле, улар баш мейеһендә барлыҡҡа килә һәм ауыртыуҙы баҫыусы булып сығыш яһай.

■ Корнелл университеты (АҠШ) ғалимдары раҫлауынса, дисгевзия - тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы һөҙөмтәһендә кеше ашарға ярамаған нәмәләр ашап, организмына ҙур зыян килтерә. Ғалимдар 158 ауырлы ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә тикшеренеүҙәр үткәргән. Бындай тайпылыш уларҙың 47 процентында күҙәтелгән һәм улар йышыраҡ боҙ, крахмал, порошок, һабын, ҡағыҙ, пенопласт, аш содаһы ашаған. Тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы, тәү сиратта, организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлығы боҙолоуы менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Шуға ла бындай ҡатындар хәүеф төркөмөнә ҡарай, улар араһында ауырлығы нормаға тулмаған балалар табыусылар күберәк. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә ҙурая. Анемия мейегә йоғонто яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйбергә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә, уның сәләмәтлеккә насар йоғонтоһо ҙур.

ХӘТЕРКИТАП

# ҺАҠМАР БУЙЫН ТЕТРӘТКӘН...

## юрматы уҡытыусыһы тураһында

**Бынан егерме ете йыл элек, Башҡортостан дәүләт институтында эшләгән осорҙа, башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультеты талиптары менән "Ниндәй халыҡ бәхетле?" тигән темаға һөйләшеү үткәргәйнем. Төрлө фекерҙәрҙе тыңлап, ошондай һығымта яһағайныҡ: "Халыҡтың яҡшы уҡытыусылары күп булһа, ул бәхетле. Киреһе лә дөрөҫ - халыҡ бәхетһеҙ икән, уның уҡытыусылары ла шәптән түгел".**

Шул һөйләшеүҙән һуң "Шоңҡар" журналына мәҡәлә яҙып ебәрҙем.

Уға ҡыҫҡа ғына исем бирҙем - "Уҡытыусы". Үҙемдең уҡытыусым Аккулова Каина Маннан ҡыҙы тураһындағы иҫтәлектәрҙе һөйләгәйнем ул яҙмамда.

"1959 йылдың август аҙағында Баймаҡ районының Муллаҡай ете йыллыҡ мәктәбенә йәш уҡытыусы килеп төштө. Ул күп яғы менән уҡытыусыларыбыҙҙан айырылып торҙо. Беренсенән, исеме менән; ауылдаштарымдың береһе лә бындай исемде гүмерҙә ишеткәне юҡ ине әле - Каина. Икенсенән, кейеме менән - ул эшкә һәр ваҡыт ҡара-күк төҫтәге ҡупшы костюм кейеп йөрөр булды. Өсөнсөнән, шул костюмдағы билдәһе менән - ул университет тамамлау тураһындағы значок ине.



Мин ул ваҡытта дүртенсе синыфта әсәйем ҡулында уҡый инем. Тағы бер йылдан Каина апай беҙҙең класс етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Ул заманда ауылыбыҙҙа туған телдең абруйы бик юғары түгел ине, сөнки ете саҡрымда ятҡан Түбә ҡасаһында күптәр урыҫ телендә аралашты. Алтынға бай төбәктә урынлашҡан ҡасаба иһә Муллаҡай халҡы өсөн мәҙәниәт, иҡдисад, сауҙа үҙәге булып хеҙмәт итте. "Тубинск" тигән урыҫ һүҙен боҙоп, шул тирәләге халыҡ уны Дубин тип йөрөттө.

Ошондай бик үк уңайлы булмаған шарттарҙа башлап ебәрҙе Каина апай беҙҙең районда башҡорт теле һәм әҙәбиәтен тейешле кимәлгә күтәреү буйынса эшмәкәрлеген. Башҡа фәндәрҙе алып барған уҡытыусылар бик көслө ине ул заманда. Тарихсы Сабур Хәйруллә улы, физик Әбдрәхим Фаруҡ улы (минең атайым), математик булып эшләгән Әкрәм һәм Камил ағайҙар, урыҫ теленән уҡытҡан Мәрфуға апай кеүек уҡытыусыларҙың абруйы бик юғары ине мәктәбебеҙҙә.

Башҡорт теленә иһә, әйткәнемсә, иғтибар булманы тиерлек. "Түбәгә барып етһәң, уның файҙаһы кәмей, ә Баймаҡтан ары китһәң, башҡорт телнең бөтөнләй хәжәте юҡ", - тигәнерәк фекер йыш әйтелә торғайны ул мәлдә.

Каина апай ҡурҡып торманы - өйөрмә һымаҡ килеп инде шундай мөхиттә йәшәгән һәм эшләгән уҡытыусылар араһына. Ул осорҙо мин хатта ҡылыс һуғышы менән сағыштырып та ҡуям. Үҙ халҡының теленә урын яулап алыу өсөн йәш уҡытыусыға бер туҡтауһыҙ ҡылысын уйнатырға тура килде. Ялтйолт! Бына бер заман көсһөҙөрәк уҡытыусылар сигенә башланы. Ялт-йолт! Ялт-йолт! Йыл да үтмәне, көсләләренең дә сираты килеп етте. Ялт-йолт! Ялт-йолт! Ялт-йолт! Тыуған яҡтарына - Ишембай районына - ҡайтып китер алдынан Каина Маннан ҡыҙы башҡорт теле дәрестәрен атаҡлы уҡытыусыларыбыҙ Сабур ағайҙың - тарих, атайымдың физика фәне кимәленә еткереп ҡуйҙы.

Алтмыш ике йыл үтеп китте ул ваҡиғаларҙан һуң. Әммә Һаҡмар йылғаһына һыйынып ятҡан Муллаҡай, Ҡолсора, Түбәнге Иҙрес һәм Үрге Иҙрес ауылдарында әле лә башҡорт теленә ихтирам оҫҡон-оҫҡон булып сәсрәп китә. Ана шул мәлдән - ҡуҙҙарын Каина апайыбыҙ һалып ҡалдырған усаҡтан - һаҡланып ҡалған ул.

Уҡытыусымдың ныҡлы белем биреүен Сибай педагогия училищеһына инеү өсөн имтихан тапшырғанда бик асыҡ төшөндөм: башҡорт теленән диктантты бишкә яҙҙым.

Аҙағыраҡ эштәрҙе тикшергән уҡытыусы Фәриҙә апай Ғариф ҡыҙы былай тип әйткән: "Быйылғы 1964 йылда уҡырға инергә теләгән дүрт йөҙҙән ашыу баланың береүһе лә башҡорт теленән 5-ле алманы". Бер аҙ өндәшмәй торғандан һуң, өҫтәп ҡуйған: "Мөхәмәтйәновтың эшен иҫәпкә алмағанда".

Был мәҡәләм 1997 йылдың йәй аҙағында баҫылып сыҡты. Уҡыу йылы башланғас, уны талиптарым ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыны. Яңы йыл алдынан ғына минә ун һигеҙ биттән торған хат индерҙеләр. Үҙ ғүмеремдә бындай ҙур күләмле хат алғаным булманы минең. Каина Маннан ҡыҙынан, өс йыл беҙгә белем биргән һәм беҙҙе тәрбиәләгән уҡытыусынан, килгәйне ҡулымдағы хат. Бөгөнгө мәҡәләмде хәтеремдә һаҡланған иҫтәлектәргә, уларҙы яңыртҡан уйланыуҙарға таянып яҙам.

*"Шоңҡар"ҙағы мәҡәләнде уҡығанға дүрт ай үтеп китте, ә мин ошо көнгә тиклем рәхмәтемде ебәрә алмайым, ҙур рәхмәт һинә, Самат, үтә лә ҙурлағанһың минең хеҙмәтемде. Уҡыусыларымдан шундай йылы һүҙҙәр, рәхмәттәр ишетеү - минең өсөн иң ҙур бүләк. Мин ул йылдарҙы һис онота алмайым, һеҙҙең барығыҙҙы ла һағынам, күрһәм килә. Һеҙҙе атай-әсәй, уҡытыусы, инженер, фән кандидаты итеп түгел, береһенән-береһе матурыраҡ, йыйнағыраҡ, тырышыраҡ уҡыған тумалаҡ ҡына шаян малайҙар, баҫалҡы ҡыҙҙар итеп күргем килә. Шул ва-*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҺҮҘЕҢ - ҮҘЕҢӘ,

## үҙең һүҙеңә килешһә...



**Тоғролоҡ - һүҙҙәребеҙҙә, эштәребеҙҙә һәм хәрәкәттәребеҙҙә дөрөҫ булыу, тигәнде аңлаталыр.**

Тоғро кеше ялған һөйләмәҫ, бер кемде лә алдамаҫ, башҡаларға ҡарата хәйлә ҡормаҫ. Тоғролоҡто Алла мосолмандары тоғро ҡылған. Бик күп аят һәм хәҙистәрҙә тоғролоҡтоң әһәмиәте аңлатылған. Ҡөрьәндә былай тиелә: "Әй, мөьминдәр, Аллаһан ҡурҡығыҙ һәм тоғролар менән бергә булығыҙ".

Мосолман - һүҙе үҙенә, үҙе һүҙенә килешкән кешеләр. Мосолман күренгән кеүек булыр, булғаны кеүек күренер.

Мосолман ҡулы һәм теле менән башҡаларға зарар итмәҫ. Үҙе өсөн теләгән нәмәне мосолман ҡәрҙәше өсөн дә теләр. Мосолман хәләл малына һәм аҫҡысына хәрәм ҡатыштырмаҫ. Ғаиләһенә һәм балаларына харам ризыҡ ашатмаҫ. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә былай тигән: "Мосолманға зарар итҡән һәм уны алдаған кеше беҙҙеке түгел".

Ҡөрьәндә былай тиелә: "Кәметеп үлсәй торған үлсәү ҡулланғандарға ҡаты ғазап барҙыр. Улар кешеләрҙән һатып алғанда теүәл иттереп үлсәтеп алыр, ләкин һатҡанда кәм үлсәп һатыр".

✓ ***Кеше белмәҫ, һиҙмәҫ, тип, бындай эштәрҙе эшләргә һис ярамай. Сөнки эшләгән эштәребеҙҙе Аллаһ һәр ваҡыт күреп тора. Кирамән Кәтибин фәрештәләре гонаһ һәм сауаптарыбыҙҙы яҙып бара.***



*ҡыттағы гонаһһыҙ, эскерһеҙ, бер ҡатлы, әйткәнемде үтәргә әҙер торған уҡыусылар итеп күргем килә. Миндә VI класты тамамлағас, бергәләп төшкән ус аяһындай ғына фото һаҡлана. Һәүәҫкәр төшөргәйне уны, Рәшит ағайыбыҙ шикелле. Йыш алып ҡарайым мин уны. Уҡыусыларымдың хаттарын һаҡлайым, һағынғанда уларҙы ла сәғәттәр буйы уҡып ултырам. Уларҙы тәү тапҡыр уҡығанда ла, хәҙер ҙә күҙ йәштәрһеҙ уҡый алмайым".*

Мин дә, килтереп кителгән юлдарҙы уҡығанда, күҙ йәштәремде тыя алмайым. Ниндәй оло йөрәкле, уҡыусыларын бөтә йөрәге менән һөйгән кеше булған икән Каина апайыбыҙ! Ике тиҫтәгә яҡын күҙ ҡаршыланы уҡытыусыбыҙҙы 1960 йылдың 1 сентябрендә. Бишенсе синыф уҡыусыларыныҡы ине шул йондоҙ кеүек янып торған күҙҙәр. Дүрт ауылдан йыйылғайны улар. Үрге Иҙрес береһенән-береһе сибәрерәк ҡыҙҙарҙы - Моратова Зәйнәпте, Мусина Раузаны, Ниғмәтуллина Хәфизәне, шуҡ малай Аманъюлов Шәфҡәтте, ә Муллаҡай етди, әҙ һүҙле малайҙарҙы - Ҡәһәрмәнов Рәхимйәнде, Зәйнуллин Нурулланы, Маннапов Мөритте - ебәргәйне белем усағына уҡырға. Ҡолсоралар иһә Мөхәмәтйәнов Рәжәп, Ҡасимғолов Морат кеүек тиҫтерҙәренән бер йылға олораҡ егеттәр, минең йәштәге бер нисә малай һәм ике ҡыҙ - Сынғыҙова Маһинур һәм Ғафарова Айһылыу - менән тулыландырҙы мәктәпте. Олпат Солтанова Минсафа менән теремек Сафиуллин Ғилметдин уҡырға Түбәнге Иҙрестән килгәйне.

Уҡыусыларын алға әйҙәгәндә Каина Маннан ҡыҙы беҙҙе үҙ өлгөһөндә тәрбиәләне. Ул шиғыр һөйләргә ярата, беҙгә Муса Йәлилдең "Вәхшиҙәр" шиғырын яттан һөйләп күрһәтте. Тетрәндерерлек итеп һөйләне ул был әҫәрҙе. Сәхнәгә сығып, халыҡ алдында һөйләгәйне, йәштәр, шиғырҙы ятлап алып, күрше ауылдарҙа концерт ҡуйғанда, репертуарҙарына индерә башланы.

Каина апайыбыҙ дәрестәр биреү, синыф етәксеһе булыуҙан тыш, мәктәптең пионервожатыйы булып та эшләне. Ауыл йәштәренең үҙешмәкәр түңәрәге менән дә етәкселек итте.

Уҡыусылары менән ҡайнап йәшәне Каина Маннан ҡыҙы. Беҙҙе тырышып эшләргә лә өйрәтте ул. Шул иҫтә ҡалған: бер йылды ауыл осонда картуф алдыҡ. Колхоз етәксеһе, уңыш һәләк була, бер класты бирегеҙ, зинһар өсөн, тип директорға килгән икән. Хужалыҡҡа ярҙамға беҙҙе, алтынсы синыф уҡыусыларын, ебәрҙеләр. Шул йылда ҡапыл һыуытты ла көтмәгәндә ҡар яуҙы. Тубыҡтан көрт, шуға картуф төбөн тәүҙә күрәйбеҙ. Өлкәнерәктәр ҡаҙа, ҡалғандар сүпләй. Бейәләйҙәр һыулана, ҡулдарыбыҙ өшөй. Ике малай, ҡоро-һары йыйып, ут яға. Уҡытыусыбыҙ балаларҙы сиратлап йылынырға ебәрә. Әммә беҙ, малайҙар, бармайбыҙ, сөнки Каина апайыбыҙҙан үрнәк алабыҙ. Ул эшен туҡтатмағас, беҙ ҙә картуф сүпләүҙе дауам итәбеҙ. Ҡыҙҙар саҡырһа: "Беҙ өшөмәйбеҙ, ышанмаһағыҙ, ҡарағыҙ", - тип, бейәләйҙәребеҙҙе сисеп эшләгән булабыҙ.

Уҡытыусыбыҙға ҡарап, унан өлгө алып, уҡыны, эшләне һәм йәшәне Ҡолсора һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең бөтә уҡыусылары. Каина Маннан ҡыҙы етәкселегендә улар яҙ көнө һаҡлағыстан картуф сығарҙы, көҙ ырҙынға иген елгәрергә сыҡты. Сусҡа фермаһына күмер ҙә йыйып алып барҙылар, һарай янындағы тиреҫ тауын яланға сығарышырға ла ярҙам иттеләр. Һауынсылар ял итә торған йорттоң тирә-яғына ағастар ултырттылар, өйҙән-өйгә йөрөп, көл һәм тауыҡ тиҙәге лә йыйҙылар. "Бындай эштәрҙе, ана, колхозсылар башҡарһын. Уҡытыусының эше - дәрес биреү, балаларҙы тәрбиәләү", - тигән һүҙҙәрҙе бер генә лә әйтмәне Каина апайыбыҙ. Гел алда йөрөгәнлектән, синыф етәксебеҙ менән ғорурлана торғайныҡ. Башҡа уҡыусылар беҙгә көнләшеңкерәп ҡаранылар.

*"Киләсәк хеҙмәт юлында абынмаҫ өсөн яҡшы белем, алтын кәңәштәр биргән уҡытыусыла уҡыуым менән дә бәхетле мин. Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтында башҡорт теле һәм уның методикаһынан Баязитов Абдулла Нәби улы уҡытты. Уҡытыусыға хас иң кәрәкле сифаттарҙы өйрәтте беҙгә. Мин уларҙы һүҙмә-һүҙ килтерәм.*

*"Класҡа йылмайып барып кер, асыу-ярһыуҙарың ишек артында ҡалһын. Класс шаулай икән, өндәшмәй генә көтөп тор, үҙҙәре һине күреп туҡтар. Уҡыусыларға күп иҫкәртеү яһама, киҫекһеҙгә әйләнәләр, бер әйт - берәгәйле әйт".*

*"Класта үҙ урыныңды таба бел, үтеп-һүтеп күп йөрөмә - иғибарҙары бүленә. Таҡтала яҙышҡанда ла кемдең ни ҡылғанын белеп тор һәм өндәшмәй генә шул уҡыусыға әйләнеп ҡара. Телмәрең йыйнаҡ, аңлайышлы булһын, шиғырҙы яттан уҡы".*

*"Уҡыусыларҙың һорауҙарын яуапһыҙ ҡалдырма. Йәш уҡытыусыны "тоторға" уйлап, дәрескә ҡағылмаған һорауҙар бирһәләр, дәрестән һуң яуап бирергә ҡалдыр. Яуап бирә алмаҫтай һорау бирһәләр, әҙерләнеп килеп, икенсе дәрестә яуап бир".*

*"Уҡыусының ваҡытын алма, дәрестән тыш эштәргә саҡыраһың икән, ваҡытында кил. Уҡыусыны кластан ҡыуып сығарма, директорға алып инмә. Көсһөҙлөк был, уҡыусылар алдында абруйың төшә".*

*"Уҡыусылар йәш уҡытыусыны аҙна-ун көн һынайҙар. Кемлегеңде белеп алғас, үҙҙәрен күрһәтә башлайҙар. Юҡ-бар һорау бирәләр, үҙ тиңдәше кеүек күреп, көлөп ҡарайҙар, үҙ-ара һөйләшәләр. Бына шул саҡта туп-тура ҡара, һинең ҡарашыңдан оялып, башын аҫҡа эйһендәр".*

*"Өҫ кейемең йыйнаҡ булһын, уны йыш алмаштырма. Уҡыусының иғтибарын ала, дәрес тыңламай, кейемеңде тикшерә. Йөҙөк, алҡа, муйынса йөрөтмә дәрескә". (Кейемгә ҡарата иғтибарлы булыу кәрәклеген дә Муллаҡайҙа белдем. Шул осор модала булған йәйге күлдәк кейеп йөрөнөм өйҙә. Мин бит директор ағай ғаиләһендә бер аҙна йәшәнем, фатирға урынлашҡансы. Ә ауылда ундай тегелешле күлдәк булмаған, күрәһең. Директор ағайҙың ҡыҙы Рәйфә әсәһенән минеке кеүек күлдәк тектереп алды. Быны Хәтифә апай үҙе һөйләне: "Тегеп бир, тип йәнемә тейҙе, барыбер тектерҙе").*

*"Ауыл халҡы араһында ла абруйың булһын. Уҡытыусы - ауыл халҡы араһында күҙ өҫтөндәге ҡаш, һәр аҙымың күҙәтелә, ярамаған ҡылығыңды берәү белһә, иртәгә үк ауылға тарала. Уҡытыусыға билдәле бер рамкала йәшәргә кәрәк".*

Тыуған яҡтарына ҡайтҡас, Каина Маннан ҡыҙы Ишембай районында ла фиҙакәр хеҙмәте менән дан алыуын белдем. Фәүзиә Ҡотлогилдина, уның йәшерәк уҡыусыһы, 2019 йылда түбәндәге иҫтәлектәрҙе яҙып һалған.

"Башҡорт теле уҡытыусыһы Каина апай иң яратҡан уҡытыусым булды. Ул минең бала ғына күңелемдә яғымлы көләс йөҙө, талапсан, дөрөҫ, ғәҙел кеше булыуы менән яулап алды. Мәктәп етәксеһе вазифаһын башҡарһа ла, эреләнмәне ул, уҡыусыларҙы үҙ балалары кеүек күрҙе. Тыуған ауылы Иҫәкәй мәктәбендә эш башлағансы, Каина апай Баймаҡ районында ла уҡытҡан. Уның ғаиләһе мәктәп булғандыр, тип уйлайым, сөнки кейәүгә лә сыҡманы, үҙ балалары ла булманы. Уның яҙмышын билдәләгәндә, Аллаһы Тәғәлә, мәктәбеңдә уҡыған һәр бала һинең балаң булыр, тигән әмер биргәндер, ахырыһы.

Иҫәкәйҙә һигеҙ йыллыҡ мәктәпте Каина апай төҙөткән, аҙаҡ ул туғыҙ йыллыҡҡа әйләнде. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, замананың дауылына ҡаршы тора алманы ул, ҡупымлаштырыуға эләгеп, ябылды. Хатта башланғыс мәктәп тә ҡалманы. Әлеге ваҡытта балалар беренсе кластан башлап күршеләге Маҡарға йөрөп белем ала..."

Юрматы ҡыҙы Каина Маннан ҡыҙы Аккулованы Ишембай районында ғына түгел, Ирәндек тауына һыйынып ятҡан Баймаҡ районында ла һаман хөрмәтләп иҫләйҙәр, уның миҫалында йәш быуынды тәрбиәләйҙәр. "Халыҡтың яҡшы уҡытыусылары күп булһа, ул бәхетле" тигән фекерҙе ҡеүәтләй уҡытыусымдың тормош юлы.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**

Кеше белмәҫ, һиҙмәҫ, тип, бындай эштәрҙе эшләргә һис ярамай. Сөнки эшләгән эштәребеҙҙе Аллаһ һәр ваҡыт күреп тора. Кирамән Кәтибин фәрештәләре гонаһ һәм сауаптарыбыҙҙы яҙып бара. Кешеләрҙе алдаһаҡ та, Аллаңы алдау мөмкин түгеллекте иҫтән сығарырға ярамай.

Ысын һәм эскерһеҙ мосолман үҙенең тоғролоғо һәм ихласлығы менән айырылып тора. Ул кешеләр менән аралашҡанда төрлө ауырлыҡтар һәм уңайһыҙлыҡтар менән осрашыуға ҡарамаҫтан, хәйләләмәй, аңлашылмаған һәм ялған һүҙҙәр һөйләмәй.

"Дөрөҫлөктә, иман килтергән кешеләр: "Беҙҙең тәрбиәсебеҙ - Аллаһ!" - тиерҙәр ҙә, иманда, диндә һәм тормошта тоғро, ғәҙел һәм ныҡ булырҙар. Үлгән ваҡыттарында уларға рәхмәт фәрештәләре килер һәм: "Һеҙ - хаҡ мөьминдәрһегеҙ. Үлемдән һәм Әхирәт ғазаптарынан ҡурҡмағыҙ. Бәлки, үҙегеҙгә вәғәҙә ителгән йәннәттәрҙең һеҙгә бирелеүенә шатланығыҙ," - тиерҙәр. Беҙ һеҙҙең менән донъяла һәм Әхирәттә дуҫтарбыҙ. Үҙегеҙгә әҙерләнгән йәннәттә күңелдәрегеҙ ни теләһә - шул булыр, унда һеҙгә ни һораһағыҙ - шул бирелер".

Тоғролоҡтан тайпылмаусы мөьминдәрҙе бына ниндәй ҙур бүләктәр көтә! Рәхмәт фәрештәләре уларға бына ниндәй ҡыуанысла хәбәрҙәр килтерә. Быларҙың барыһы ла тоғролоҡтоң ни ҡәҙәр юғары һәм бөйөк дәрәжәлә булыуын күрһәтә. Быларға бары тик Алланан ҡурҡыусы, Аллаға ысын күңелдән ғибәҙәт ҡылыусы һәм был донъяла байлыҡ, юғары дәрәжә һәм башҡаларға баш эйеү бығауҙарынан азат булғандар ғына ирешә.

Йөрәгенә Ислам тәрбиәһе һеңгән ысын мосолман үҙ вазифаһына тоғролоҡло һәм биргән вәғәҙәләрен үтәүсе була. Был сифаттар уның йәмғиәттәге урынын билдәләүсе иң мөһим үҙенсәлек булып тора. Был үҙенсәлек уны тағы ла дәрәжәлерәк итә. Бындай сифатҡа эйә булыу мосолмандың хаҡ динле булыуын күрһәтә.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡара тумыртҡа, ҡара туҡран

**(Желна, черный дятел)**



Тумыртҡа һымаҡтар ғаиләһенә ҡарай. Тумыртҡа - беҙҙең төбәк халҡына яҡшы таныш ҡош. Ҡара тумыртҡа уларҙың иң эреһе (ҡара ҡарға ҙурлығында). Төҫө ҡап-ҡара, ата ҡоштоң башы, инә ҡоштоң соңҡаһы ҡып-ҡыҙыл. Күҙҙәре аҡ тиерлек, йәки һары. Ҡанаттарын төрлөсә оҙонлоҡта ҡағып, ауыр оса. Осҡан саҡта киҫкен генә "кри-кри-кри" тип ҡысҡыра. Башҡа саҡта тауышы һағышлы, "клюээ" тиеберәк ишетелә. Йыл әйләнәһенә тауышлана, тауышы таҙа, матур, ҡайҙандыр төпкөлдән ишетелгән һымаҡ. Тумыртҡалар араһында оҡшаш төрҙәр юҡ.

Беҙҙең урмандарҙа ғәҙәти ҡош, шулай ҙа ҡайһы урындарҙа һирәк осрай. Ҡарт, оҙон ағастар үҫкән ылыҫлы һәм япраҡлы урмандарҙы ярата. Ҡасандыр янғын булған, шулай уҡ сирле, зарарланған ағастар үҫкән урындарҙы үҙ итә. Бәләбәй ҡалҡыулығында, Өфө платоһында, тотош Көньяҡ Уралда йыш осраған ҡош.

Февраль - мартта ағасты туҡылдата башлай. Тап ошо осорҙа тауышлыраҡ була бара. Апрелдә иһә ҡара тумыртҡалар парлашып, оя ҡора. Парҙар бер-береһенә яҡын урынлаша. Ҡарт, йыуан олонло ағаста 8,5x12 сантиметр ҙурлыҡтағы тура мөйөш соҡоп инә. Оя ерҙән 4-5 метр бейеклектә, 10 метрға ла етә. Ғәҙәттә 3-6, йышыраҡ 4-5 йомортҡа һала. Улар аҡ төҫтә. Икәүләп сиратлап баҫалар, аҙаҡтан бәпләләргә ризыҡты ла сиратлап ташыйҙар. Ояла үҙҙәрен һаҡ тоталар, тауышланмайҙар. Шул рәүешле бәпкәләрен сит күҙҙәрҙән һаҡлайҙар. Ата ҡош оя ҡороуҙа, уны төҙөк тотоуҙа бигерәк әүҙем, был эште ятарып башҡара. 12-14 көндән бәпкәләр сыға, 24-28 көнлөк булғас, улар оянан оса башлай. Осор алдынан бер нисә көн баштарын ғына сығарып, ҡысҡырып ултыралар.

Башлыса ағас ҡайырыһын зарарлаған бөжәктәр, уларҙың йомортҡалары, ҡарышлауыҡтары - ҡабыҡ ҡуңыҙы, мыйыҡлы ҡуңыҙҙар, сөсөк ҡуңыҙы, алтын ҡуңыҙ, мөгөҙғойроҡ һ.б. менән туҡлана. Яңы ҡороған ағастарҙың ҡайырыһын соҡой. Ҡайһы саҡта ағас кимерә торған ҡырмыҫҡалар ояланған ҡайын төпһәләрен тотошлай соҡоп, уны бысынтыҡсаға (опилка) әйләндерә. Ҡар булмаған мәлдә, шулай уҡ ҡышын ҡырмыҫҡа ояһын туҙҙыра, оло ҡырмыҫҡаларҙы ла, уларҙың йомортҡаларын да ашай.

Йәй аҙағында һәм көҙөн ояһынан унар, хатта йөҙәр саҡрымдарға ситкә китә. Оло ҡоштар бер ерҙә ултыраҡ йәшәй, шулай уҡ улар араһында ла урын алыштырыусылар бар. Ғалимдарға ҡара тумытҡаның 7 йәшкә тиклем етеүе билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 22 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.30, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.40 Д/ф "Одна счастливейшая жизнь". Полная версия. К 100-летию со дня рождения Кирилла Лаврова". [12+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-5". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.15 Х/ф "Жених напрокат". [12+]**
**1.45 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 23 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-6". [16+]**
**11.00, 21.00, 22.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.15, 20.45 Квадратные метры. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 3.30 Подкаст. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Д/ф "Тихая моя Родина". [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Елкән". [6+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Проект: Время назад". [16+]**
**1.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 24 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-6". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Доступный Башкортостан. [12+]**
**17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Деловая среда. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Все говорят, что я люблю". [16+]**
**1.45 Спектакль "Земляки". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 25 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Бой с тенью". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-7". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Деловая среда. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Креативный код. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "На другом берегу". [16+]**
**2.00 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 26 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Д/ф Премьера. "Меня зовут Альфред Хичкок". [18+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Прости". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Х/ф "Три в одном-7". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дустар. [12+]**
**23.30 Х/ф "Бронкская история". [16+]**
**1.45 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**4.30 Тайм-аут. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 27 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Роман Мадянов. С купеческим размахом". [12+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.35 Д/ф "Напрасные слова". К 80-летию Ларисы Рубальской". [16+]
15.50 Д/ф "Тело государственной важности. Подлинная история Красной королевы". К 90-летию со дня рождения Регины Збарской". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб веселых и находчивых". Встреча выпускников-2025. [16+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Петросян-шоу. [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Счастье по ошибке". [16+]
0.45 Х/ф "Вторая попытка". [12+]
4.09 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [12+]**
**9.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.15 Своих не бросаем. [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 "Читаем с грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Курсак". [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Доступный Башкортостан. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск). КХЛ.**
**19.00 Новости (на баш. яз).**
**19.30, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Подкаст. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Ключи от неба". [6+]**
**2.00 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**6.00 Тайм-аут. [12+]**

## 28 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Премьера. "Будем жить!". [16+]
13.15 "Видели видео?" [0+]
14.45 Д/ф Премьера. "Хозяин тайги". Ко Дню амурского тигра на Дальнем Востоке". [16+]
15.40, 0.00 "Горячий лёд". Фигурное катание. Открытие сезона 2025-2026. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
17.05 "Михаил Задорнов: вся жизнь". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Опасная близость". [18+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.30, 2.30 Х/ф "Елена Прекрасная". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Д/ф "Атомный прорыв. К 80-летию атомной промышленности". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Атомный прорыв". [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 20.30 Автограф. [12+]**
**8.15 Күстәнәс. [12+]**
**8.45 Доступный Башкортостан. [12+]**
**9.00 "Мама". [12+]**
**9.15, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 "Читаем с грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Креативный код. [12+]**
**14.00 О чем молчат Памятники. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 Формула здоровья. [12+]**
**16.00 Д/с "Научные сенсации". [12+]**
**16.45 Х/ф "Ключи от неба". [6+]**
**18.15 Деловая среда. [12+]**
**18.45 Башкортостан#вместе. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [12+]**
**20.00 Квадратные метры. [12+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Назифы Кадыровой. [12+]**
**0.30 Х/ф "Великолепные Эмберсоны". [16+]**
**3.00 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҪ ВАҠЫТТАРЫ
*1447 һижри йыл.*

| Сентябрь (Рәбиғел әүүәл Рәбиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (30) дүшәмбе | 5:13 | 7:02 | 13:30 | 17:13 | 19:15 | 21:04 |
| 23 (1) шишәмбе | 5:15 | 7:04 | 13:30 | 17:11 | 19:12 | 21:01 |
| 24 (2) шаршамбы | 5:17 | 7:05 | 13:30 | 17:09 | 19:10 | 20:58 |
| 25 (3) кесе йома | 5:20 | 7:07 | 13:30 | 17:07 | 19:07 | 20:55 |
| 26 (4) йома | 5:22 | 7:09 | 13:30 | 17:05 | 19:05 | 20:52 |
| 27 (5) шәмбе | 5:24 | 7:11 | 13:30 | 17:03 | 19:02 | 20:49 |
| 28 (6) йәкшәмбе | 5:26 | 7:13 | 13:30 | 17:00 | 19:00 | 20:46 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЫЛ ҒАИЛӘ ҺЕҘГӘ ТАНЫШМЫ?




**36-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Уҡлау. Сарафан. Азькышет. Сабата. Комик. Атев. Кимоно. Әрме. Оле. Фәнил. Сари. Екке. Кеҫә. Атари. Итек. Тухъя. Үпкә. Коба. Етмеш. Ханбок. Әләм.

**Вертикаль буйынса:** Кокошник. Алмиҙеү. Калфак. Смак. Папаха. Ыҙан. Ҡыртыш. Әтәсе. Әле. Түбә. Тувыр. Хром. Узала. Елкә. Сәукеле. Ярыш. Ситек. Арго. Агрофизика.

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*



# ЯНҒЫНДАН...

**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров республика халҡын тәбиғәткә сыҡҡанда ут менән һаҡ булырға саҡырҙы.**

Көҙгә ҡоро үләндә бәләкәй генә усаҡ яғыу, тәмәке төпсөгө ташлау ҙа ут сығыуға сәбәпсе була ала, тип иҫкәртә ул. "Йорттар эргәһендәге ҡоро үләнде һәм сүп-сарҙы яндырмағыҙ, урманда яҡҡан усаҡтарҙы һүндерегеҙ, юл ситендә, автотрасса буйлап, шулай уҡ урманда һәм яланда янған шырпы һәм тәмәке төпсөгө ташламағыҙ, балаларға янғын хәүефе янаған әйберҙәр менән уйнарға рөхсәт итмәгеҙ. Ҡаланан ситкә сығырға, баҡсаларға барырға ниәтләгән һәр кемде ошо мөһим ҡағиҙәләрҙән тайпылмаҫҡа саҡырам. Иғтибарлыраҡ булыуығыҙҙы һорайым. Ут менән һаҡһыҙ эш иткән өсөн бик юғары хаҡ түләгәнебеҙҙе онотмайыҡ", - тине етәксе.

Андрей Назаров һүҙҙәренсә, йыл башынан янғын һүндереүселәр 1300 гектарҙан ашыу майҙанда 14 урман янғынын һәм 328 ут сығыу осрағын теркәгән.

**Әйткәндәй...**

Белорет районының Ломовка ауылында күп балалы ғаилә йәшәгән йорт янып китә. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, янғын һүндереүгә 14 кеше һәм биш берәмек техника йәлеп ителә. Янғын ваҡытында йортта биш кеше булған. 2009, 2016 һәм 2019 йылғы балалар тәҙрә аша сығып, ҡотолоп ҡала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, атаһы менән әсәһе ут ҡорбаны була, уларҙың үле кәүҙәләре янғын урынында табылған.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 сентябрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

**23 сентябрь "Хыялға ҡаршы"** (А.Баймөхәмәтов, инсц. А. Ишбулдина, И. Ҡаҙаҡбаев), героик булмаған повесть. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 сентябрь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло, А. Абушахманов), мөхәббәт тураһында әкиәт. 6+

**20 сентябрь "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 16+

**21 сентябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**21 сентябрь "Ҡара һыуҙар"** (М.Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), төш аралаш өн. 18:00. 12+

**23 сентябрь "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 6+

**25 сентябрь "Играем Пушкина: Царевна-Лебедь"** (А. Пушкин, О. Мусина), әкиәт. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 сентябрь "Коллекция смеха"** (О.Куценко). 19:00. 16+

**20 сентябрь Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+

*Сыуаш дәүләт ҡурсаҡ театры гастролдәре:*

**21 сентябрь "Сказка о ежике, волшебном лесе и кое о чем"** (Д. Андронова). 12:00, 15:00 һәм 17:00. 0+

**22 сентябрь "Король Лир"** (У. Шекспир). 13:00 һәм 19:00. 16+

**22 сентябрь "Жди меня"** (Д. Андронова). 12:00, 15:00 һәм 19:00. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

Театр коллективы махсус хәрби операция темаһына арналған **"Фәрештәләр беҙҙең янда"** (12+) тамашаһы һәм Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның **"Һөйөү көсө"** (12+) мелодрамаһы менән Урал аръяғына гастролдәргә сыға. Спектаклдәр:

**23 сентябрь** - Баймаҡ мәҙниәт йорто сәхнәһендә

**24 сентябрь** - Сибай театр-концерт берекмәһе залында

**25 сентябрь** Әбйәлил районы Асҡар ауылы мәҙәниәт йортонда үтә.

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**22 сентябрь "Лебединое озеро" балетынан сюита** (П. Чайковский, Д.Крюков). БР Академия дәүләт симфоник оркестры концерты. 6+

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

## ҠУРЫЛДАЙ

Һарыһыу мәлендә ҡурылдай сире (бронхит) көсәйеүсән була. Унан һаҡланыу өсөн: һыуған ашарға һәм уның шәкәрле һутын эсергә; түш, арҡаны иҙелгән һуған ҡушылған һарыҡ майы (эс майы яҡшыраҡ) менән ышҡырға; бер тамсы спирт йәки камфара тамыҙып, йылы һөт, кишер һуты эсергә; йүткертһә, көнөнә өс мәртәбә 2-3 сей хөрмә емеше ашарға, ә төнгә 1 ҡалаҡ көнбағыш майы ҡушып, эҫе сәй эсергә.

## ТАМАҠ АУЫРТҺА

Тамаҡҡа һырғанаҡ майы, лимон һуты, бал һөртөргә; муйынға иҙелгән һуған менән араҡы компресы ҡуйырға; сей кәбеҫтә япрағын бәйләргә - уны өс сәғәт һайын яңыртып тороу отошло; сөгөлдөр һуты менән тамаҡты сайҡау ҙа шифалы, һутҡа аҙыраҡ һеркә ҡушаһың; танау-йотҡолоҡ мускулдарына күнегеү эшләйһең: 10-30 секунд телде шартлатырға, ауыҙҙы ҙур асып, "а"ны һуҙырға, тел осон аңҡау буйлап йөрөтөргә, телде сығарып, мөмкин тиклем аҫҡа һуҙырға. Күнегеүҙе 6 мәртәбә эшләргә.

✓ *Рюмка - алкоголизм юлының башы, ашаған ваҡытта бер-ике рюмка эсеүе - уртаһы. Ә аҙағы - эскән килеш үлтереү өсөн төрмәлә ултырыу, психиатрия дауаханаһында ятыу, ҡапыл ғына еңел ауырып үлеү...*



АФАРИН!

# САНКТ-ПЕТЕРБУРГ СӘХНӘҺЕНДӘ



**Башҡортостандың драма театрҙары сәнғәте тарихында - сағыу ваҡиға! Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры легендар Рәсәй Милли драма театрында "Бөйрәкәй" һәм "Ваня ағай" спектаклдәрен уйнаны.**

Илебеҙҙең мәҙәни үҙәге булып һаналған Санкт-Петербург ҡалаһында барған XVI Халыҡ-ара "Александринский" театр фестивалендә сентябрь айы дауамында Һиндостан, Венгрия, Сербия һәм Ҡытай театрҙары коллективтары сығыш яһаны. Был мәртәбәле сарала М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының ҡатнашыуы - театрҙың ижади мөмкинлектәрен күрһәтеү һәм данлыҡлы милли театрҙар араһындағы мәҙәни бәйләнеште нығытыуҙа мөһим аҙым ул. Юғары кимәлдәге әҫәрҙәр ҡарап өйрәнгән, үтә талапсан һәм зауыҡлы тамашасыһы менән дан тотҡан "Александринский" фестивале башҡорт артистарын ҡайнар алҡыштарға күмде! 12 сентябрҙә тамашасы хөкөмөнә Таңсулпан Ғариповаһың "Бөйрәкәй" романы буйынса режиссер Айрат Абушахманов ҡуйған спектакле тәҡдим ителде. Тамаша аҙағында оҙайлы, дәррәү алҡыштар, залдағы йылы, ихлас мөхит театрҙың бөйөклөгән һәм сикһеҙлеген, уның төрлө мәҙәниәт кешеләренең күңелен берләштереүсе сәнғәт төрө икәнен тағы бер тапҡыр иҫбатланы.

Фестивалдең икенсе көнө М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының М. Шкетан исемендәге Мари милли драма театры менән берлектә уйнаған "Ваня ағай" спектакленә арналды. Антон Чеховтың пьесаһы буйынса режиссер Степан Пектеев сәхнәләштергән был спектакль Рәсәй Милли театрҙар ассоциацияһы ярҙамында тормошҡа ашырылып, ике театрҙың сәхнәләге үҙенсәлекле ижади тәжрибәһенә әйләнде.

XVI Халыҡ-ара "Александринский" театр фестивале сиктәрендә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры вәкилдәре осрашыуҙарҙа, түңәрәк ҡорҙарҙа ла ҡатнашты. "Бөйрәкәй" спектакле алдынан театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов менән ижади осрашыу үтте. Санкт-Петербург ҡалаһының киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре, тамашасылар фестивалгә Башҡортостандан алып килгән спектаклдәрҙән тыш, Айрат Әхтәм улының ижад юлы менән ҡыҙыҡһынды. Шулай уҡ Башҡорт академия драма театры директоры Иршат Фәйзуллин, баш режиссер Айрат Абушахманов Милли театрҙар ассоциацияһының "Милли сәхнә. Аралашыу тәжрибәһе" тигән темаға арналған түңәрәк ҡорҙа ла ҡатнашты.

Театрыбыҙҙың Рәсәй Милли драма театрының данлыҡлы сәхнәһендә уҙ спектаклдәрен уйнауы - Башҡорт академия драма театрының Рәсәй милли театрҙар хазинаһына ҙур өлөш индереүен таныу менән бергә, уның көслө труппаһына һәм ижадсыларына ҡарата ихтирам билдәһе лә ул. Театр коллективының юғары кимәлдә уҙған мәртәбәле фестивалдә ҡатнашыуы - ошо коллективта яңып ижад итеүсе, тырыш хеҙмәте менән театрҙың абруйын һәм данын күтәреүсе ижадсыларҙың оло еңеүе. Афарин, ҡотлайбыҙ!

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# РУХТЫ УЯТЫР САРА

**Башҡортостанда Милли кейем көнө билдәләнде. Ул республика етәксеһе Радий Хәбиров указы буйынса 2020 йылдан башлап йылына ике тапҡыр ойошторола - апрелдең өсөнсө һәм сентябрҙең икенсе йомаһында.**

12 сентябрҙә Милли кейем көнө уңайынан республиканың төрлө мөйөштәрендә әһәмиәтле датаға арналған саралар ойошторолдо. Башҡортостандың Милли музейында ЭТНО стиле көнө, Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Беләҙектәр сыңы" күргәҙмәһе ойоштороҙо. Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана "Милли кейем: образ, стиль, рух" түңәрәк өҫтәленә, шулай уҡ башҡорт эстрадаһы артистары ҡатнашлығындағы программаға, халыҡ оҫталарының оҫталыҡ дәрестәренә һәм тематик күргәҙмәләргә саҡырҙы. Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы йорто был көндә "Арт-квадрат"та дуҫлыҡ әйлән-бәйләне үткәрҙе. Аксаков исемендәге мәҙәниәт һәм ял баҡсаһында иһә "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының финалы ойошторолдо. Ҡунаҡтар лауреаттарҙың эштәрен, күргәҙмә-йәрминкәне ҡараны, "Милли кей" балалар уйындарында һәм киске уйындарҙа ҡатнашты.

# БӘЙГЕГӘ САҠЫРАЛАР

**Өфөлә Фәйзи Ғәскәров фестиваленә ғаризалар ҡабул итеү оҙайтылды. Ансамблдең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, әле 34 ғариза килгән. Ҡатнашыусылар араһында Өфөнән, Башҡортостан ҡалаларынан һәм райондарынан тыш, Силәбе һәм Һамар өлкәләренән, Татарстандан ансамблдәр бар.**

Ансамбль Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында был конкурсты тәүге тапҡыр үткәрә. Конкурс быйыл сентябрь-октябрь айҙарында Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең концерт залында була. Конкурстың маҡсаты - хореография сәнғәте ҡаҙаныштарын пропагандалау, халыҡ бейеүҙәре ансамблдәренең художество кимәлен күтәреү һәм ижади йәштәрҙең халыҡ хореографияһына ҡыҙыҡһыныуын көсәйтеү.

Конкурстың финалы 21 октябрҙә Башҡортостанда Милли бейеү көнөндә була. Еңеүсе коллектив легендар Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән бер сәхнәлә сығыш яһай. Конкурсҡа ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итеү 19 сентябргә тиклем оҙайтылды. Ижади бәйгелә өс йәш категорияһында һәүәҫкәр бейеү ансамблдәре ҡатнаша: үсмерҙәр төркөмө (10-14 йәш), өлкән төркөм (14-17 йәш), ҡатнаш төркөм (22 йәшкә тиклем). Еңеүселәрҙе лауреат исемдәре, махсус номинациялар һәм аҡсалата бүләктәр көтә. Конкурсҡа ҡатнашыу өсөн ғаризаны gaskarov.konkurs@yandex.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӨЛӨШ БАР ЕРҘӘ... үлеш бар

Ерең һатһаң ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Рюмка - алкоголизм юлының башы, ашаған ваҡытта бер-ике рюмка эсеүе - уртаһы. Ә аҙағы - эскән килеш үлтереү өсөн төрмәлә ултырыу, психиатрия дауаханаһында ятыу, ҡапыл ғына еңел ауырып үлеү... Бик күп аҡыл эйәләре, эшселәр, алданып ошо юлға баҫа, шарап үлемгә табан алып барған юл.

**(Джек Лондон).**

Бер үҙеңә шатланыу - күңелһеҙ.

**(Лессинг).**

Һүҙҙәр япраҡтар кеүек. Күп япраҡлы ағастар гел генә аҙ емеш бирә.

**(А. Поуп).**

Бөтә бәхетле ғаиләләр бер-береһенә оҡшаш, һәр бәхетһеҙ ғаилә үҙенсә бәхетһеҙ.

**(Л. Толстой).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер төркөм кеше бер аҡһаҡал эргәһенә килә һәм уның йәнәшәһендә йәшәргә, унан донъяуи аҡылға өйрәнергә теләүен белдерә. Аҡһаҡал күнә һәм улар бергәләп йәшәргә ҡарар итә. Әммә яңы төркөм кешеләре аҡыллы һабаҡтар алыу, тормош тәжрибәһе туплау урынына, аҡһаҡалдың етешһеҙлектәренә төртөп күрһәтеп, уны туктауһыҙ тәнҡитләй, игәй башлай. Был хәлгә ҡарата аҡһаҡал шундай һүҙҙәр менән яуаплай:**

**- Һеҙ мине таш кеүек шымартырға итәһегеҙ, ләкин таштың да шымартыуға бирелмәй торған ҡытыршы урындары булған кеүек, минең холҡомдоң да ҡытыршылыҡтары бар - был кешенең үҙлеге тип атала. Һеҙ ҙә төрлөһөгөҙ һәм мин шулай уҡ һеҙгә оҡшамағанмын. Шундай аҡыл бар: Ҡояш төрлө объекттарҙы үҙенә тарта. Бәрәүҙәре уның орбитаһында тороп ҡала һәм йәшәү сығанағы таба. Икенселәре Ҡояш эргәһендә үҙҙәрен насар тоя, сөнки улар үҙҙәрен барыһының да иғтибар үҙәгендә булыр һыуҙыуы итеп тоя. Уларға, киреһенсә, Ҡояш эргәһендә түгел, ә барыһының да үҙе тирәһендә әйләнеү мөһим була. Ләкин эсендә ут булмағас, Ҡояш булып булмай һәм башҡа объекттарҙы үҙенә тарта алмайһың. Ошо хәҡиҡәтте аңламайынса, ул икенселәр Ҡояштан айырыла һәм Йыһанға осоп, боҙ киҫәгенә әйләнә. Ҡояш булыргә теләү генә аҙ, эсендә Хоҙай уты йөрөтөргә лә кәрәк бит әле...**

**Аҡһаҡалдың телмәренән һуң бер аҙ уйланып та тормаҫтан:**

**- Был аҡһаҡал бигерәк мыжыҡ, үҙе турала юғары фекерҙә. Беҙ уның эргәһендә ҡала алмайбыҙ, - тигән теге төркөм кешеләре һәм үҙҙәренең өҫтөнлөгән танытырға теләп, икенсе тарафтарға юл тотҡан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 25037

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 18.09.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 18.09.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 19.09.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1753